

# Л М М ШТЫК МЕН Н

*Башҡорт әҙәбиәтенә уҙған быуаттың 60-сы йылдарында килгән беҙҙең быуын (күбебеҙ ул саҡта вуз студенттары) өсөн Бөйөк Ватан һуғышынан ҡайтҡан яугир ҡәләм оҫталары буй етмәҫ бейеклек, ҡаһарманлыҡ һәм рухи юғарылыҡ өлгөһө булды. Һәм шундай булып ҡалдылар ҙа.*

*Улар менән башта юғары уҡыу йорттарында әҙәби кисәләрҙә осрашһаҡ, тора-бара матбуғат йортонда, редакцияларҙа, китап нәшриәтендә, Башҡортостан яҙыусылар союзында, ғилми институтта күрешергә, аралашырға тура килде.*

*Оло ҡәләмдәштәрем — фронтовик яҙыусылар Хәниф Кәрим, Ҡадир Даян, Сәләх Кулибай, Әмир Чаныш, Әнүәр Бикчәнтәев, Назар Нәжми, Мостай Кәрим, Янибай Хамматов, Шәриф Биҡҡол, Муса Ғәлиҙәр менән бер ижади союзда бергә ҡайнау, төрлө йыйын, съездарҙа, командировкаларҙа бергә булған саҡтарҙы айырыуса йылылыҡ, һағыныу менән иҫкә алам. Элекке фронтовиктарҙың ҡайһы берҙәре: Ғәли Ибраһимов, Шакир Янбаев менән «Ағиҙел» журналы редакцияһында, Нур Зарипов менән Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында (аспирант саҡта), Зөлфәр Хисмәтуллин менән Башҡортостан яҙыусылар союзында бергә эшләү ҙә насип булды.*

*Ут-һыу үткән, һуғыш яралары набат кеүек хәтерҙәренә ҡағып торған әҙиптәребеҙ Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Хәким Ғиләжев, Ибраһим Ғиззәтуллин, Муса Ғәли, Нәжиб Асанбаев, Янибай Хамматов, Әхиәр Хәкимовтар менән яҡындан аралашыу бәхете тейҙе, өйҙәрендә күп тапҡырҙар булырға тура килде, әҙәби мөхит, рухи донъябыҙ хаҡында әллә күпме әңгәмәләшкән мәлдәр хәтерҙә.*

*Һуғыштан һуң әҙәбиәтте күтәреүҙә, башҡорт әҙәбиәтен Рәсәй һәм донъя кимәленә сығарыуҙа яугир яҙыусыларыбыҙҙың ижади хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Еребеҙ яҙмышын ҡурсалаған, заман һулышын тойоп йәшәгән ил ағалары бөгөнгө быуын әҙиптәре өсөн генә түгел, ә киләсәктә лә башҡорт әҙәби телен нығытыуҙа, нәфис әҙәбиәтте артабан үҫтереүҙә ижад ҡаһарманлығы өлгөһө булып торасаҡ.*

*Яугир әҙиптәребеҙ ҙә ғүмерҙәрен биреп, изге ҡандарын ҡойоп яулап алған Бөйөк Еңеүҙең етмеш йыллығын билдәләгәндә уларҙың яҡты рухтары ла беҙҙең менән. Исемдәрен иҫкә алабыҙ, әҫәрҙәрен уҡыйбыҙ, китаптарын нәшер итәбеҙ икән, тимәк, улар рухи донъябыҙға фиҙакәр хеҙмәттәрен дауам итә. Амин, шулай булһын.*

*Кәҙим АРАЛБАЙ.*

# Нәжиб Асанбаев
# (1921—2013)



## Драматургиябыҙҙың «паша»һы

Әҙәбиәт донъяһында ла күнегелгән ҡанундар бар: шағирҙар — шағирҙар тураһында, прозаиктар үҙҙәре тураһында яҙыусан. Драма жанрындағы ҡәләмгирҙәрҙә лә шул уҡ хәл. Һәр кем үҙ мөхитенә яҡын булғанды хуп күрә.

Мин иһә был мәҡәләмдә оло драматург, әҙәбиәтебеҙ уҙаманы Нәжиб Асанбаев тураһында үҙемдең ҡайһы бер уйҙарым менән бүлешмәксемен. Сөнки ул, әҙәбиәттең иң ҡатмарлы, иң ауыр цехында эшләүенә ҡарамаҫтан, бөтә төр жанрҙарҙа ла ижад итеүсе ҡәләмдәштәре менән иң ябай мөғәмәләсе, әңгәмәсел, иң еңел аралашыусан, һәр кемгә кәрәкле тел асҡысы табыусан шәхес ине.

Минең Нәжиб Асанбаев тигән драматург менән беренсе осрашыуым студент йылдарына тура килде. Ул осорҙа (1963—1968) Башҡорт дәүләт академия драма театры хәҙерге опера һәм балет театры бинаһында эшләй ине. Һәм беҙ, студенттар — кисәге ауыл һылыуҙары һәм малайҙары, бер-ике йыл уҡытырға өлгөргән ҡыҙҙар һәм хеҙмәттән ҡайтҡан һалдаттар, театр ҡарарға группабыҙ, хатта бөтә курсыбыҙ менән йөрөй торғайныҡ. Хәтерҙә: театрҙа шаулап, ҙур уңыш-алҡыштар менән «Рәйсә» (1957), унан «Фәйзи» (1962) спектаклдәре барҙы. Бер-бер артлы ҡуйылған был драмаларҙы тәү тапҡыр ҡарағанға хәҙер инде биш-алты тиҫтә йыл ғүмер үтеп тә киткән, ә тамашасыларҙың артистарҙы аяҡ үрә баҫып алҡышлауҙары һаман күҙ алдында.

Ни бары йәш тамашасы булараҡ, беҙҙе әле генә күңел тетрәтерлек ҡыҙыу, киҫкен тормош күренештәренән һыуынып та өлгөрмәгән сәхнәгә баһадир кәүҙәле, асыҡ йөҙлө драматургтың киң йылмайып сығып баҫыуы, нисектер, хистәр ҡойононан айнытып ебәрә ине. Күңелдәрҙә ҡапма-ҡаршылыҡлы уй-тойғолар көрәшә башлай:

«Шулай ҙа буламы ни?»

«Әле генә әрнеткән, ярһытҡан, көлдөргән дә, илатҡан да, уйландырған да, моңландырған да хәл-ваҡиғаларҙы, баҡтиһәң, бына был яҙыусы ағай уйлап сығарған икән дә!» — «Һуң, унда күрһәтелгәндәрҙең бөтәһе лә ысын тормоштағыса лабаһа!..» — «Барыбер беҙ уйламағанса, көтөлмәгәнсә килеп сыҡҡан, әй...»

Тәрән хис-тойғолар, ҡатмарлы уй-кисерештәр аша яҙмыштарҙы образлы һынландыра алған яҙыусы ағайға һоҡланыуыбыҙҙың сиге юҡ!..

Йылдар үтә торҙо. Нәжиб ағайҙың ижад фантазияһы менән тыуған «Һыу юлы» комедияһы (1972), «Кеше бәхете» драмаһы (1964), «Ҡанат йәйгәндә», «Аҡ сирендәр», «Зәйтүнгөл» драмаһы (1974) һ.б. пьесалары буйынса ҡуйылған спектаклдәр республикабыҙ театрҙары сәхнәләренә, шулай уҡ күрше өлкә тамашасылары ҡаршыһына атлай торҙо.

1977 йылдан инде Нәжиб ағай Асанбаев менән мин йыш һәм яҡындан аралаша башланым, сөнки ул йылда мине «Ағиҙел» журналы редакцияһынан Яҙыусылар союзы идараһына эшкә күсерҙеләр. Ә драматург ағайыбыҙ, тынғыһыҙ йәмәғәтсе булараҡ, ижад секцияһын да етәкләне, партия ойошмаһында ла, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары ҡоронда ла иң актив ойоштороусы ине. Вазифаларҙың береһен дә ауырһынманы, киреһенсә, ул бурыстарҙың кешеләргә кәрәклеген тойоп, ҙур теләк һәм ихласлыҡ менән башҡарыр булды.

Нәжиб ағайҙың шул йылдарҙағы сираттағы яңы әҫәре — «Ҡыҙыл паша» драмаһы — өҫтөндә эшләгән дәүере күҙ алдында.

1928—1932 йылдарҙа Сауд Ғәрәбстанында эшләгән беренсе совет илсеһе, беҙҙең данлы яҡташыбыҙ Кәрим Хәкимов тураһында сәхнә әҫәре яҙыу хыялын тормошҡа ашырыуға әҙип бик ентекле, төплө әҙерләнде. Илсенең Мәскәүҙә йәшәгән ғаиләһенә барыуҙар, уның яҡындарын, белгән кешеләрен эҙләп табып осрашыуҙар, Йәмән Ғәрәп Республикаһына махсус сәйәхәт, архив материалдарын «иләктән үткәреп» өйрәнеү Нәжиб Асанбаевта тарихи тематикала эҙәрмәнлек сифаттарын үҫтерҙе.

Мәшһүр башҡорт совет илсеһе Кәрим Хәкимов тураһында драма әҫәре яҙыу ниәте менән рухланып, Нәжиб Асанбаев 1981 йылдың ноябрендә Төньяҡ Йәмән Ғәрәп Республикаһының башҡалаһы Санаға юлланды. Был мауыҡтырғыс та, әммә ҡатмарлы ла сәфәрҙә уны Мәскәүҙән 5 тәржемәсе һәм журналист Игорь Ермаков менән Тажикстандан яҙыусы Мөъмин Ҡаноат оҙатып барҙы. Бөйөк держава СССР тарҡалмаған ул замандарҙа сит илдәр алдында беҙҙең илдең абруйы ҙур, совет кешеләренә ихтирам менән ҡарайҙар. Ә инде фарсы телен яҡшы белгән тажик яҙыусыһы Мөъмин Ҡаноаттың Нәжиб ағайға юлдаш булыуы — үҙе бер ҡәнәғәтлек тойғоһо, күңел тыныслығы сығанағы, сөнки Мөъмин — беҙҙең яҡын дуҫ, туған кеүек. Ул Башҡортостанда булған кеше, беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙе, яҙыусыларҙы яҡшы белә. Мостай Кәрим, Әхиәр Хәкимов, Муса Ғәли менән күп тапҡырҙар осрашҡан, ил кимәлендә уҙғарылған әҙәби сараларҙа бергә ҡатнашҡан әҙип. Үҙе бик әҙәпле, ихлас, юғары мәҙәниәтле кеше.

— Ғәрәп иленә минең сәфәремдә СССР-ҙың Төньяҡ Йәмәндәге илселегендә атташе булып эшләүсе Ирек Аблаевтың ярҙамы күп тейҙе, — тип һөйләгәйне Нәжиб ағай көньяҡ ярымшарҙағы ғәрәп илендә йөрөп ҡайтҡас. — Ул беҙҙең яҡташ булып сыҡты — Ейәнсура районында тыуып үҫкән, БДУ-ла уҡыған. КГБ мәктәбен тамамлағас, уны Йәмән Республикаһына эшкә ебәргәндәр. Ғәрәп телен яҡшы белә, ғаиләһе бар. Гөрләтеп йәшәп ята, өйөндә лә булдыҡ. Ирек бик шәп егет. Минең ундағы осрашыуҙарҙы, ғөмүмән, бөтә сәйәхәткә бәйле мәсьәләләрҙе ул хәл итте. Бер көндө ял итергә тәбиғәт ҡосағына ла алып сыҡтылар беҙҙе. Оҙон ҡолға тотоп, ултырған ерҙән генә ағас башындағы сәтләүектәрҙе ҡойоп төшөрөп ашағандар бөгөнгөләй хәтеремдә.

Минең Кәрим Хәкимов тураһындағы драма әҫәрем өсөн ғәрәп илендәге мөхитте, уларҙың тормошон белеү кәрәк ине. Һәм мин ошо тормошто үҙ күҙҙәрем менән күрҙем, үҙем татыным. Бөйөк дипломаттың эҙҙәренән үттем, эшләгән, йәшәгән урындарына индек, күрҙек. Кәрим Хәкимовты белгән өс ҡартты эҙләп табып, минең менән осрашыуға алып килделәр. Улар беҙҙең илсе тураһында үҙҙәре белгән ҡәҙәр һөйләп бирҙеләр. Шунда буласаҡ әҫәремдең айырым-айырым ваҡиғалары күҙ алдына баҫты.

Йәмәндән беҙ тыуған илдән ситтә йәшәүҙең ни икәнен тойоп ҡайттыҡ. Унда булған ун көн эсендә шәхсән мин үҙем шуны тойҙом. Ҡисерештәремде Кәрим Хәкимовтың уй-тойғолары, йөрәк һыҙланыуҙары, күңел кисерештәре менән сағыштырып, үлсәп ҡарайым да, һиҫкәнеп китәм: йә хоҙай, сағыштырырлыҡ та түгел! Сөнки ул йәшәгән хәтәр осор, ҡатмарлы сәйәсәт, арттан күҙәтеүҙәр... Ә иң мөһиме — һағыныу тойғоһо, тыуған илдән айырылыу һағышы. Һин үҙ өҫтөңә ниндәй генә яуаплы миссия йөкмәгән булһаң да, кеше буларак, тыуған ереңдең, үҙ халҡыңдың бер өлөшө, күҙәнәге. Бына ошо сит илдәге яңғыҙлыҡ хисе, һағыныу тойғоһо мине драма өсөн Кәрим Хәкимов образына бәйле «Бик һағындым һине, тыуған илем» тигән йыр яҙырға этәрҙе лә инде. Һәм мин уны яҙҙым. Композитор Морат Әхмәтов йырҙы көйгә һалды. Ә инде К.Хәкимов ролен башҡарыусы

артист Әхтәм Абушахманов йырламағанға күрә, спектаклдең режиссеры Лек Вәлиев был йырҙы матрос Солтандан (Фидан Ғафаровтан) йырлатты. Ф.Ғафаров башҡарыуында был йырҙың тамашасылар һөйөүен яулауы һеҙгә мәғлүм. Бына шулай тамамланды Кәрим Хәкимов эҙҙәренән йөрөү, уның тормош юлдашы Хәҙисә ханым, ҡыҙҙары Флора менән аралашыу, иҫтәлектәрен тыңлау. Ижад ғазаптары кисермәй тороп, әҫәр яҙып та булмай. Яҙһаң да, ул әҫәрең тормошсан булмай. Мин шулай уйлайым...

Ғилми тикшеренеүсе менән художник хыялын оҫта берләштереп, тарихи-әҙәби материалды сәхнә ҡанундарына тура килтереп дөйөмләштереүгә авторға оло уңыш килтерҙе. Н.Асанбаев әҙиптәрҙән Кәрим Хәкимов образына мөрәжәғәт итеүселәрҙең беренсеһе булһа, «Ҡыҙыл паша» спектакле башҡорт драматургияһында А.Таһиров, Д.Юлтый, М.Буранғол, С.Мифтаховтар башлаған тарихи теманы үҙенсәлекле дауам итеүсе, уны яңы баҫҡысҡа күтәреүсе булды.

Тик шуныһы: хатта сит ил тамашасыларының ихтирамын яулаған ошо спектакль бөгөн башҡорт театр сәхнәһенән төшөп ҡалды, һәм уның объектив сәбәптәренең береһе, минеңсә, төп геройҙарҙан булған имам Йәғәфәрҙе уйнаған РСФСР-ҙың халыҡ артисы Хөсәйен Ҡудашевтың ҡапыл ғына вафат булып китеүелер. Нишләйһең бит, үлем аяуһыҙ. Әммә, барыбер «Ҡыҙыл паша» спектаклен ҡасан да булһа яңынан сәхнәгә сығарыу уйынан баш тартмаҫҡа кәрәк. Ни өсөн тигәндә, был мәшһүр драма — уҙған XX быуаттың классик сәхнә әҫәре, һәм уны яңы быуын тамашасыларға күрһәтеү — академия театрының хәленән килерлек эш.

Был урында мәрхүм Хөсәйен ағайҙы иҫкә алғас, йәнә бер нәмә иҫкә килеп төштө. Драматург Нәжиб Асанбаев менән актер Хөсәйен Ҡудашевтың дуҫлығы ошо спектаклде сәхнәгә ҡуйған мәлдә айырыуса көсәйҙе, нығыны, булһа кәрәк. Уларҙың икәүләп баҡсала йөрөгәндәрен дә, ҡыҙыу бәхәсләшеп театрҙан ҡайтып килгән саҡтарын да күргеләнем. Ғәрәп иленә барғас инде, фестиваль спектаклдәрендә Хөсәйен ағайҙың тарихи ерлекте ни тиклем тәрән һиҙемләп, айырыуса бер тойғо менән, мөкиббән бирелеп уйнағанын һөйләгәйне Нәжиб ағай. Тик ғәрәп дуҫтар иленә сәфәр Хөсәйен Ҡудашевтың һуңғы гастроле булыр, тип кем генә уйлаһын!.. Фронттың алғы ут һыҙығында ауған яугирҙай, Хөсәйен ағай Ҡудашев һуңғы һулышын ватандаш дуҫы Нәжиб Асанбаевтың ҡулдарында ала.

Дуҫлыҡ тойғоһо йәшкә ҡарамай, тиҙәр. Был һүҙҙең дөрөҫлөгөнә мин Нәжиб Асанбаевтың үҙенән күпкә йәш ҡәләмдәштәре менән дуҫтарса мөнәсәбәттә булыуын күреп тә ышандым. Фәрит Богданов, Наил Ғәйетбаев, Кәбир Аҡбашев, Рәлиф Кинйәбаевтарҙың драматург булараҡ быуын нығытыуҙарында һәм был ауыр жанрға тоғро хеҙмәт итеп килеүҙәрендә оло дуҫтары һәм кәңәшселәре Нәжиб Асанбаевтың йоғонтоһо ҙур булды, тип әйтһәм, моғайын, яңылышмамдыр. Оҫта менән өйрәнсек бер-береһенә ни тиклем ихлас һәм эскерһеҙ булһа, һөнәр нескәлектәре һәм серҙәре лә шул тиклем теүәл, бөтә тулылығында асыла торғандыр.

1980 йылдың ҡышында мин Хәйбулла районының Яңы Ергән ауылында үткән «ялымдан» «Аҡ тирмә» исемле яңы поэмамды яҙып алып ҡайттым. Эшкә сығыуымдың тәүге көнөндә үк яҙыусылар союзында Нәжиб ағай Асанбаев осрап, хәл-әхүәлдәр һорашҡанда, мин әйткән поэмам менән ҡыҙыҡһынды, уны тыңлап ҡарарға теләне. Мин шатланып ризалаштым һәм Нәжиб ағай поэмамды тыңлаған беренсе кеше булды. Ул, фронтовик булараҡ, тыуған ауылы юҡҡа сыҡҡан кешенең кисерештәрен тағы ла тәрәнерәк аңланы. «Бына хәҙер инде ауылығыҙ бөтөрөлгәс тә, әле, әйтәйек, атайыңды эҙләп хаттар килмәйме?» —

тип һорап ҡуйҙы, һәм фекерен дауам итеп: «Поэмаңда, бәлки, ошо турала ла уйланырһың», — тип өҫтәне.

Мин Нәжиб ағайҙан ҡайтҡан кис ултырып, поэмама йәнә бер бәләкәй генә бүлек өҫтәнем. Унда шундай юлдар тыуҙы:

Хаттар килә иҫке адрес менән,
Хаттар килә эҙләп атайҙы.
Фронтташы яҙа хәл белешеп,
Эҙәрмәндәр юллай һалдатты.
Хәҙер инде килмәй Таңатарға
Өсмөйөшлө һалдат хаттары.
Ҡилә дүрткелдәре, тик барыбер
Сыңлай улар йәнде аҡтарып.
Хаттар килә эҙләп Таңатарҙы,
Хатта шуға хәтер алҡышлай.
Тик эйәһен тапмай китә хаттар,
Төшөр ер тапмаған аҡҡоштай...

Һуғыштың утлы ғәрәсәтен үткән элекке батарея командиры капитан Нәжиб Асанбаев поэмам менән танышып, иң тәүгеләрҙән булып фекер әйтеүе, миңә, йәш ҡәләмдәшенә, кәңәш биреүе, уның өйөндә үткән бер кис, уның ихлас әңгәмәһе ғүмергә онотолмаҫ. Оло ҡәләмдәшем булараҡ, уға минең рәхмәтем ҙур.

Һәр ваҡытта ла тураһын ярып әйтер, әммә кешелекле, кеселекле һәм ярҙамсыл, ихлас Нәжиб ағай Асанбаевтың йәш ҡәләмдәштәре менән аралашыуға һыуһап йәшәүе — күптәр һоҡланырлыҡ сифат ине. Бәхетлеләр сифаты...

Нәжиб Асанбаевтың «Ҡыҙыл паша» тарихи драмаһы бәхетле яҙмышлы булды: Башҡорт дәүләт академия драма театры артистары башҡарыуында ул спектакль Мәскәү Бөтә Союз Үҙәк телевидениеһы аша СССР тамашасыларына күрһәтелде; ә 1983 йылда әҙәбиәт, сәнғәт өлкәһендәге иң яҡшы әҫәрҙәр һәм башҡарыу оҫталығы өсөн Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы пьесаның авторы, драматург Н.В.Асанбаевҡа, төп ролде (Ҡәрим Хәкимов) башҡарыусы артист Әхтәм Абушахмановҡа, спектаклде сәхнәгә ҡуйыусы-режиссер Лек Вәлиевҡа бирелде.

«Паша» һүҙе — ғәрәп һәм төрки донъяһында ололау билдәһе, ихтирам яулаған кешегә генә әйтелер дәрәжә. Драматург Нәжиб Асанбаев — үҙенең оло ижад юлында, сәхнә сәнғәтенә тоғро һәм емешле хеҙмәт итеү юлында, дәрәжәле хөрмәтләүгә лайыҡ уҙаман, башҡорт драматургияһының «пашаһы» аталыр әҙип.

* * *

Тарихи тема драматург Нәжиб Асанбаевты «Ҡыҙыл паша» пьесаһынан һуң оҙаҡҡа ебәрмәгән икән. Бер-нисә лирик пландағы әҫәрҙәрҙән һәм Бөйөк Ватан һуғышында яҡташтарыбыҙҙың ҡаһарманлығына бағышланған «Яралы яҙмыш» (1995) драмаһынан һуң Н.В.Асанбаев тарихи тематикаға йәнә мөрәжәғәт итте. Был юлы ул 90-сы йылдарҙан башҡорт халҡына «ҡайтарылған» шәхестең — күренекле ғалим-тюрколог, автономиялы Башҡортостан Республикаһының тәүге етәксеһе, ғүмеренең яртыһынан күп өлөшөн тыуған иленән ситтә (Төркиәлә) үткәрергә мәжбүр булған Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың ауыр ҙа, тетрәткес тә һәм данлы ла ғүмерен драматик алымдар аша күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Бер нисә йыл рәттән Мәскәү, Өфө архивтарында материалдар туплай, өйрәнә, Ә.-З.Вәлидиҙең «Хәтирәләр» китабын ҡат-ҡат уҡып сыға, Төркиәгә барып, мәшһүр ғалимдың ғаиләһе менән осраша, ул уҡытҡан университетта,

китапханаларҙа була, уның шәхси әйберҙәрен күрә, китаптарын ҡулына ала, профессорҙың эш өҫтәле артында ултыра... Н.Асанбаев әҫәр яҙыр өсөн бик күп материал туплай һәм, ниһайәт, өс өлөштән торған драматик трилогия яҙып тамамлай. Уның пьесаһына нигеҙләнеп, Салауат дәүләт драма театры «Ҡөҙән башҡорто» спектаклен 2005 йылда сәхнәгә сығарҙы. Ә.-З.Вәлидиҙең тыуыуына 115 йыл тулыу айҡанлы был спектакль башҡалабыҙ Өфөлә, Салауат һәм Ишембай ҡалаларында күрһәтелде.

«Ҡөҙән башҡорто» драмаһы — Нәжиб Асанбаевтың тарихи темала эшләүенең йәнә бер уңышлы һөҙөмтәһе булһа, халҡыбыҙҙың бөйөк улы, күренекле дәүләт эшмәкәре һәм бөтә донъяға танылған тарихсы-ғалим, профессор Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың исемен художестволы алымда — сәхнә сәнғәте аша мәңгеләштереүҙә баһалап бөткөһөҙ ижади ҡаһарманлыҡ өлгөһө лә булды.

2006, ғинуар.

## Асанбайға асыҡ хат

*(Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Н.В.Асанбаевҡа)*

Нәжиб ағай!
Данлы замандашым,
Булмаһам да һинең яуҙашың,
Беҙ бит бөгөн бер рух фронтында
Әҙәбиәттең ике һалдаты.
Әммә айырма ҙур:
Һеҙҙең өҫкә
Ябырылған утлы дауылдар.
Минең атай ауған...
Һынау тотам,
Ҡәләмдәшем, һинең алдыңда.

Атайым юҡ.
Бары һәйкәле бар.
Баҫҡан ере — мәрмәр постамент.
Мин дә һаман һалдат:
Рух һалдаты,
Тел һағында мәңге постамын.
Атай яуҙаштары:
Ғәли, Хәким,
Асанбайҙар, Назар, Мостайҙар —
Утлы ҡорал түгел, ҡәләм һоноп,
Миңә һабаҡ биргән остаздар.

Оло ҡәләмдәшем,
Нәжиб ағай,
Һин бит моңдаш, юлдаш ҡасандан!
Беҙҙең кеүек «байҙар» нәҫеленән,
Исемең дә оҡшаш — Асанбай!
Һин беләһең:
Тарих хыянатһыҙ,
Иренмәйсә таҙарт туҙандан, —
Замананың ят елдәрен уҙып,
Хәҙер килеп баҫа уҙғандар...

Юҡҡамы ни һинең әмер менән
«Ҡыҙыл паша» менде сәхнәгә?!
«Ҡөҙән башҡорто» ла ҡайтты илгә,
Ирек орлоҡтарын сәсмәгә...
Мәсемхандар, Асанхандар һымаҡ
Ер һелкетер заттар юйылған.
Ҡалаларҙан харабалар ҡалған,
Хәтер — тере, ергә уйылған...

Дөрләйҙер ул һиндә хандар ҡаны,
Асанхандар ҡоно, Асанбай?! —
Ҡанды хандан алғанһыңмы-юҡмы,
Ижад атың ярһыу ҡасан да!
Ил алдында тауҙай хеҙмәтең бар,
Тәсдиҡләне уны Указ да.
Ҡукрәр йылдарыңда тик ятма, тип,
Бирәйекме әллә наказ да?

Һин — керәшен —
Тарих төпкөлөнән
Керәшеңдәрҙән сыҡҡан аҫаба,
Аҙ күтәрҙеме ни керәшен тәре?!
Аҙ күтәрҙеме ни керәшендәрең?!
Керәшенде күтәр, Асанбай!..

Ерҙә яңы дәүер ҡанат йәйә.
Йыр талпына йөрәк түрендә.
Ал офоҡто итеп алтын йәйә,
Малай йүгерә Ахман үрендә...

3.11.2006.

## Әхиәр Хәкимов
## (1929—2005)



### Мәңгелек бәйгеһендә

Әхиәр Хәким... Яҙыусы Хәкимов исеме әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынған оло быуынға ла, йәштәргә лә берҙәй үк таныш. Таныш ҡына түгел, яҡын да, үҙ ҙә. Сөнки уның төп ижад емештәре — тарихи романдары бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә һәр береһе үҙ урынын таба һәм хаҡлы баһалана килә. Яҙыусының үҙенә генә хас тел-стиль маһирлығын әйтеү фарыҙдыр иң әүәл. Тарихи романдарын уҡыу — үҙе бер ләззәт, ниндәйҙер тартып-ылыҡтырып тороу көсөнә эйә. Һүҙгә аптырамай ағай — авторҙың үҙе булһынмы, геройҙарының уй-хыялы йәки хәбәреме — телмәре берсә шишмәләй сылтырап-сыңлап, берсә олпат, киң йылғалай, берсә ярһыу диңгеҙ-даръялай ташып-үрәпсеп аға ла аға, күңел ярҙарыңа ҡаға, йәнгә яғылып-һағып ҡала. Һүҙ байлығы менән, бығаса һин ишетеп белмәгән, әммә борондарҙа ата-олатайҙар, әбей-инәйҙәр ҡулланған ғәжәп тос, тапҡыр, бик тә урынлы һүҙҙәр менән эш итә Әхиәр Хәким үҙ әҫәрҙәрендә. Ынйы-мәрйендәй, яҡут-гәүһәрҙәй ана шул һүҙ байлығына юлығаһың да, ғәжәпләнеп-һоҡланып ҡуяһың: «Ҡайҙан был тиклем һүҙгә оҫталығы, ҡайҙан табып бөтә икән шул ҡәҙәрле һүҙ байлығын!?» Бына ни өсөн әҫәрҙәренең теле йырлап тора, улар еңел уҡыла, автор кәүҙәләндерергә теләгән образдар, халыҡ тормошо бөтә тулылығында моң-аһәңе менән уҡыусы аңына килеп етә. Быңдай юғарылыҡ, минеңсә, яҙыусының үҙ ижадына ҡуйған талабынан килә. Әгәр ул үҙ эшенә шундай талапсан булмаһа, билдәле, әҫәр ҙә сейле-бешле икмәккә оҡшар ине. «Прозаға килгәндә, — тип фекер йөрөтә Ә.Хәкимов, — уның үҙ ритмы бар. Унда ла һүҙҙең образлы булыуы, һөйләмдәрҙең бер-береһенә тығыҙ үрелеүе шарт. Ошоға ирешергә ынтылам да инде. Шулай булмаһа, проза юҡ, сөнки уның тәбиғи айышы, моңо боҙола. Хәйер, был сифат тиәйемме, талапмы яҙыусының эске һиҙемләүенә, булмышына бәйлелер...» («Башҡортостан». 1999, 3 март).

Күреүегеҙсә, яҙыусы үҙ прозаһына шиғриәткә, йыр-моңға мотлаҡ хас сифат аша ҡарай, шул тулҡын-ритм, йыр-моң һулышында яҙырға ынтыла.

«Эске һиҙемләү» менән яҙыусы «булмышына» килгәндә, улар инде — талант, тәжрибә һәм оҫталыҡ билдәләре. Был юғарылыҡҡа бер кем дә тәүге әҫәре менән үк өлгәшмәй. Хатта Сыңғыҙ Айтматов та, үҙенең «Тополек мой в красной косынке» повесы менән танылыу алғансы, тәүге хикәйәләре, очерктары менән өйрәнеү-оҫтарыу мәктәбен үткән. Әхиәр Хәкимов та үҙенең бөгөнгө яҙыусылыҡ булмышына, йәғни ҙә әҙәбиәтебеҙҙә маһайып телгә алырлыҡ «Һауыр ҡумта», «Думбыра сыңы», «Ҡаруан», «Өйөрмә» романдарын тыуҙырғанғаса, «Гөлбикә», «Алтынсәс», «Йәйғор», «Осар ҡоштар», «Туй», «Бәйге», «Күпер» әҫәрҙәре аша килде, шул повестарын яҙғанда әҙәби оҫталыҡҡа, камиллыҡҡа өлгәште. Уның был повестары түбән кимәлдә яҙылғандар тигән фекер үткәрергә йыйынмайым мин һис тә. Юғарыға менгәндә баҫҡыстарҙың рәт буйынса аҫтағылары ла бик кәрәк, мөһим һәм үҙ урынында. Сөнки башта аҫтағыларына баҫмайынса, өҫкә үрмәләп булмай.

Ошо урында мин Әхиәр Хәким үткән ижад юлын (һәм ғүмер юлын да!) барлайым да уйҙан кисерәм: ә нимәлә һуң яҙыусының халыҡсанлыҡ көсө, милли һыҙаты?

Башҡорт халҡының тел байлығын, һүҙ ҡеүәһен оҫта һәм урынлы ҡулланыуын әйткәйнек инде. Шулай ҙа халыҡсанлыҡ һәм милли һыҙат (колорит) бары тик тел байлығында ғынамы ни?

Яҙыусы ижадына иң юғары талаптарҙан килгәндә (ә ул шулай булырға тейеш тә!), әҫәрҙәрендә автор үҙен тулы килеш асырға ынтыла, бөтә мөмкинлектәрен файҙалана. Ул һынау тота: уҡыусың алдында бар һәләтеңде йә асып һалаһың, йә... «ярай инде, булғанынса булды...» тип тынысланаһың. Әхиәр Хәким ундайҙар тоҡомонан түгел. Әгәр ул разведкаға бара икән, мотлаҡ уңыш менән ҡайта — иртәгә башланасаҡ һөжүмдең аҙағы һөҙөмтәле булырына өмөт күңелдәрҙе елкендереп тора.

Халыҡсанлыҡ һәм милли һыҙат — ул үрҙә әйткән тел саралары аша әҙәби образдарҙа кәүҙәләнеш, һүрәтләгән тормош һәм мөхиттең ышандырғыс көсөнә эйә булыуы ла. Әхиәр Хәкимдең ҡайһы ғына геройын алмайыҡ (Һабрау сәсән, Ҡыуандыҡ оҫта, һөйкөмлө ҡыҙ-батыр Ҡөмөштамсы, Хәҙисә Барласова, Нурислам Байтурин, Алсынбай, Аҡназар һ.б.), улар тормош төпкөлөнән сыҡҡан кешеләр, халыҡ мәнфәғәте өсөн үҙҙәрен аямай алғасҡыға атлығып тороусы шәхестәр. Ошо йәһәттән Әхиәр Хәкимдең күпселек әҫәрҙәренең халыҡ ижадына таяныуын да билдәләргә кәрәк. Йәғни, яҙыусы өсөн фольклор — төп сығанаҡ хеҙмәтендә. Халҡыбыҙ «тарих яҙыр инем ташына» тип юҡҡа ғына әйтмәгән: моң-һағышта сайҡалып ултырған талын ҡырҡып алһаң да, ерен-һыуын һаҡлап ауған батырҙар ҡандары тамып ҡалыр изге еребеҙҙә «Урал ҡаялары иңрәй кеүек, ҡайҙа ҡолаҡ ҡуйып ҡарама...»

Әхиәр Хәкимдең романдарындағы тарихилыҡ ышандырыу көсөнә эйә, сөнки уларҙың аҫылдарҙан-аҫыл ерлеге бар. Авторҙың үҙе әйткән «тарих һағышы» бер уның йөрәген генә һулҡылдатмай, ә был әҫәрҙәрҙе ҡулына алған һәр уҡыусының йән яраһына ҡағылып үтә...

Йомғаҡлап әйткәндә, Әхиәр Хәкимдең таланты тыуҙырған сәсмә әҫәрҙәр халҡыбыҙҙың ҡанлы вә шанлы тарихына художестволы төплө бер байҡау булһа, ул дәүерҙәрҙең һынландырылған ил азаматтары һәм ҡыҙҙары — бөгөнгө һәм килер быуындар өсөн ысын мәғәнәһендә өлгө булырлыҡ шәхестәр, милли характерҙар.

1999 й.

## Әхиәр Хәким һәм Шәреҡ донъяһы

Көнсығыш тематикаһын башҡорт әҙәбиәтенә яҡынайтыуҙа, анығыраҡ итеп әйткәндә, көнсығыш илдәре тарихында башҡорт халҡының арҙаҡлы улдарының туранан-тура ҡатнашлығы хаҡында әҙәби-нәфис һүҙ әйтеүҙә Әхиәр Хәкимдең өлөшө ҙур. Әле бынан байтаҡ йылдар элек ижад ителгән «Һауыр ҡумта» (1982), «Думбыра сыңы» (1986) романдарында уҡ яҙыусы башҡорт халҡының һәләтле зыялыларының Урта Азия һәм ғәрәп, фарсы илдәрендә ғилем эстәп, һәр төрлө сәнғәт оҫталыҡтарына, дин вә мәғишәткә, мәҙәниәткә өйрәнеп ҡайтыуҙарын, уларҙың тыуған илдәге артабанғы яҙмыш-көнитмештәре хаҡында юғары зауыҡ менән тасуирлағайны. Был романдар Мәскәүҙә үҙәк нәшриәттәрҙә урыҫ телендә донъя күреп, авторға лайыҡлы дан-шөһрәт тә килтерҙе — Әхиәр Хәкимов 1989 йылда Рәсәй Федерацияһының иң юғары әҙәби бүләгенә — М.Горький исемендәге Дәүләт премияһына өлгәште.

Һуңғы йылдарҙағы шундай уҡ әүҙем ижадында яҙыусы таланты йәнә көнсығыш донъяһы менән бәйләнеште сағылдырыуға арналған әҫәрҙәр тыуҙырҙы. Был теҙемдә, мәҫәлән, «Дала моңо» романы (2001), «Ҡойолған япраҡтар» («Ағиҙел». 2002, №1), «Йыһан ҡапҡаһы» («Ватандаш». 2003, №8) повестары бар.

Шәреҡте яҡшы белгән өсөн генә яҙмағандыр Ә.Хәкимов был әҫәрҙәрен. Башҡортҡа Шәреҡте яҡынайтыу теләгенең хикмәте әҙәбиәтебеҙҙе тематик йәһәттән байытыу өсөн генә лә түгелдер, ә «Беҙ кем? Ҡайҙан?» тигән мәңгелек һорауҙарға яуап эҙләүҙер ҙә, бәлки. Европа менән Азия ҡитғалары тоташҡан ожмах төбәге — мәғрур Уралда борон-борондарҙан йәшәүебеҙгә ҡарамаҫтан, ҡанбабаларыбыҙҙың ҡарашы башта беҙгә ҡәрҙәш төрки халыҡтары бишегенә — Ҡөнсығышҡа уҡталған булған. Иғтибар итегеҙ: көн сығышына, тимәк, көн тыуышына төбәлгән уларҙың уй-ниәттәре һәм өмөттәре, һәм ошоларҙан сығып, тормошҡа, йәшәүгә булған тәжрибә, аҡыл, донъя көтөү ҡанундары, йола, ғөрөф-ғәҙәттәре формалашҡан, камиллашҡан. Мәҫәлән, боронғо башҡорттарҙың, бүтән төрки халыҡтары кеүек, ун ике йыллыҡ календарь — мөсәл менән йыл иҫәбен алып барыуҙары һәм ундағы йылдарҙың күп халыҡтар өсөн уртаҡ, таныш йәнлектәр исеме менән аталыуы; артабан Күк (Йыһан) тәңреһенә табыныуҙары, хоҙайҙарының күп булыуы (Ибн Фаҙлан яҙмаларын иҫкә алайыҡ) һ.б.

Шәреҡ донъяһы менән башҡорт бәйләнеше боронғо замандарҙа көслө лә, ныҡлы ла булған, әлбиттә. Йолаларҙа, ғөрөф-ғәҙәттә, йорт-ҡаралты орнаменттарында (биҙәү-биҙәкләү, сигеү-һырлау), телебеҙҙә, мәҙәниәттә һәм халыҡ ижады үрнәктәрендә Шәреҡ йоғонтоһо ниндәйҙер кимәлдә һаҡланып килгәнлеген билдәләргә кәрәк.

Әйтелгәндәргә ныҡлы дәлил булараҡ, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәким үҙенең киң билдәле романдары һәм повестары менән беҙҙе Шәреҡ донъяһынан айырылмаҫҡа, тарихи һәм рухи тамырҙарыбыҙҙы ҡоротмаҫҡа өндәй. Шуны онотмаһаҡ ине.

2004 й.

## Балҡантау бөркөтө

*Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимовҡа*

Һауаларҙа, киреп ҡанаттарын,
Мәғрур бөркөт ерҙе күҙәтә.
Ул эҙләмәй ерҙән ҡорбан, табыш,
Донъя фанилығын киҫәтә,

Һәм абайлай: көмөш ҡылғандарҙың
Башын эйгән хәтәр елдәрҙе,
Ат тояҡҡайҙары иҙеп үткән
Ғүмерҙәре зая гөлдәрҙе...

Күҙ алдында кеүек:
Заятүләк
Һыуһылыуын тотҡан тамаша...
Ил күҙ йәшен быуат-быуат йыйған
Асылыкүлдән күҙҙәр ҡамаша...

Саңҡый бөркөт, кинәт ишеткәндә
Дала үңеренән һарҡылып,
Шәреҡ шаны һеңгән думбыраның
Һарһылып та сыҡҡан зар-моңон.

Саңҡый бөркөт! Шыйлай ҡанаттары,
Балҡантауҙар тора тыңланып,
Асылыкүлдәр, Ҡандракүлдәр тертләй,
Бөркөт саңҡыуынан шомланып.

Ярһытамы уны думбыра сыңы,
Солғай микән әллә һағышҡа —
Күккә һыймай, үрләй, үрһәләнә,
Ҡаурыйҙарын өтөп ҡояшҡа.

Оса бөркөт,
Ерҙең хыял, ғәмен
Һәм ғәйрәтен үҙенә йыйғандай...
Ә думбыра — ерҙә,
Ир ҡулында,
Шаңдауҙары иңрәй йыһанда...

1999 й.



# Муса Ғәли
# (1923—2004)

## Моңло Муса шишмәләре

Легендар быуын вәкиле ул — әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы, күренекле шағир Муса Ғәли. Ошо легендар быуында — Хәким Ғиләжев, Ғилемдар Рамазанов, Муса Ғәли һәм Шәриф Бикҡол — дүрт яугир-әҙип, Дәүләкән педагогия училищеһын тамамлап, имен хеҙмәт юлына аяҡ баҫҡас ҡына, ерҙе ауыр туптар гөрһөлдәүе тетрәтә. Улар, ун һигеҙ-ун туғыҙ ғына йәшлек егеттәр, бер төптән күтәрелеп, һалдат гимнастеркалары кейеп, билгә һары ҡайыш быуып, ҡулға ҡорал алып, дошман менән аяуһыҙ алышҡа ташланалар. Дүртеһе лә ҡаты яралар менән тыуған илгә — һөйөклө Башҡортостанға әйләнеп ҡайта, һәм тағы ла хеҙмәт — был юлы әҙәбиәт фронтында һүҙ сәнғәтенә хеҙмәт — башлана. Быныһы инде оҙайлы хеҙмәт — срокһыҙ, алһыҙ-ялһыҙ, ғүмерлеккә ижад утында яныу...

Дүрт яугир-әҙип халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәре булып етеште, арымай-талмай әҙәбиәт йөгөн тарттылар. Дүртеһенең дә башҡорт әҙәбиәтен яңы бейеклектәргә күтәреүҙә дөйөм уңыштары булған кеүек, һәр береһенең тик үҙҙәренә генә хас, айырым-айырым үҙенсәлекле ижадтары, ҡабатланмаҫ моңаһәңле шиғриәттәре күңелдәрҙе тарта һаман да.

Дүртеһен дә берләштергән йәнә бер уртаҡ һыҙат хаҡында ла әйтмәү мөмкин түгел. Ул — әҙәби алмаш тәрбиәләүгә талымһыҙ хеҙмәт итеү. Аллаһы Тәғәлә биргән талант-кеүәнде йәш ҡәләмдәштәрең менән ихлас бүлешеү.

Ошо оҙайлы ижад ғүмере эсендә, әгәр иҫәпләп ҡараһаң, Муса ағай йәштәрҙең күпме тәүге ҡулъяҙмаларын уҡыған, кәңәштәр күндергән, фатиха биргән. Йөҙҙән ашып китәлер, кәм тигәндә. Ә бит һәр бер ҡулъяҙма артында шағир яҙмышы тора: хуплайһыңмы һин уны ижад юлына, әллә сыбыҡлайһыңмы...

Ғөмүмән (мин белә-белгән 60-сы йылдарҙан), Муса ағай йәштәргә ҡаты бәрелмәне, ҡаты бәғерлелек күрһәтмәне. Әммә был йомшаҡлыҡты, объектив булмауҙы аңлатмай. Ҡулъяҙмаларға ҡарата ул тейешенсә ғәҙел, хаҡ баһалы булды. Әммә етешһеҙлекте, йәш ҡәләмдәшенең яҙыуҙағы кәмселектәрен ул бик һаҡ, ипле генә төҙәтер, йә уйынсалап, йә кинәйәләп еткерер. Йәш авторға бындай мөғәмәлә — күңелгә майҙай. Ошондай мөнәсәбәттән һуң ул оло әҙипкә магнитҡа тартылғандай тартыла, йылыға яҡынлағандай ылыға башлай.

Муса ағайҙың айырыуса ҡатын-ҡыҙ шағирәләргә иғтибарлылығы маҡтау ҙа, һоҡланыу ҙа тойғоһо уята. Был тәңгәлдә беҙҙә ниндәй шағирәләр бар һәм әҙәбиәттә үҙ урынын алған, шуларҙың күбеһе хаҡында Муса Ғәли һүҙ әйткән булыр. Ҡәтибә Ҡинйәбулатова, Фәүзиә Рәхимғолова, Әнисә Таһирова, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева, Тамара Искәндәрова һәм башҡа шағирәләрҙең ижадына ул үҙе ғашиҡ булып, үҙ итеп, айырыуса бер һоҡланыу һәм инаныу менән фекер уртаҡлаша.

Муса Ғәли байтаҡ йылдар Башҡортостан Яҙыусылар союзының шиғриәт секцияһына етәкселек итте. Башҡорт шиғриәтенең үҫеш тенденцияларын байҡап, 1970—1980 йылдарҙа ижади йыл йомғаҡтарына арналған докладтар яһаны. Уның доклад һәм сығыштары, ғәҙәттә, теоретик юғарылыҡ, дәлилдәр төплөлөгө менән айырылып торҙо. Башҡорт шиғриәтенә генә хас милли колоритты күреү,

милли образдарҙы тотоп алыу һәләте менән ул — үҙенең поэтик кимәлен, донъя шиғриәте талаптарынан сығып фекер йөрөтөүен, киң эрудицияһын да танытты. Муса ағайҙың йәштәргә туранан-тура ярҙамы, ижади йоғонтоһо дөйөм әҙәби процесҡа, әҙәбиәт үҫешенә һис шикһеҙ ыңғай тәьҫир яһаны. Йәш әҙиптәрҙе ана шулай быуын-быуын үҫтереү, даими хәстәрлек күрһәтеү әҙәбиәттә Муса Ғәлиҙең ижад мәктәбен булдырҙы тиһәк, һис тә арттырыу булмаҫ, һирәктәр өлөшөнә төшә бындай бәхет.

Муса Ғәли — бик үҙенсәлекле тыуған яҡ йырсыһы ла. Уның шиғриәте ҡулына ҡорал тотоп һаҡлаған ғәзиз тыуған еренә, мәғрур Уралыбыҙға сикһеҙ мөхәббәт менән һуғарылған, сал ҡылғанлы далаларға һәм сая бөркөттәр төйәкләр ҡыраз тауҙарға ҡайнар хис-тойғолар менән туҡылған. Байтаҡ ҡына шиғырҙарына мәшһүр композиторҙарыбыҙ матур-матур көйҙәр яҙған, йырсыларыбыҙ репертуарҙарынан төшмәҫ моңло йырҙар ижад иткән...

Мин әкиәт кеүек күреп бағам
Үҙ еремдең зәңгәр төҫөнә.
Париждарҙан урап ҡайтһам да мин,
Иҫерәмен арыш еҫенә...

— тип яҙҙы Муса Ғәли, тыуған ер ҡәҙерен изге анттай йөрәк түрендә йөрөткән кеше булараҡ, 1975 йылда үҙенең «Тыуған яҡта» шиғырында.

Тыуған яғы — Шишмә яҡтарында Муса Ғәлиҙең Аҡ шишмәһе бар. Шағирҙың күркәм юбилей байрамдарының ошо сихри, нурлы, йырлы Аҡ шишмә буйҙарында үткәненә шаһит булғаным бар. Ул инеште халыҡ «Муса шишмәһе» тип тә йөрөтә.

Әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Муса Ғәли шишмәләре иһә — оло әҙәбиәт Иҙеленә килеп ҡойған мул һыулы һалҡын шишмәләрҙең моңлоһо ла, йоро ла, тынмаҫы ла, ҡоромаҫы ла.

Шишмәләр иле — Башҡортостан һәм уның әҙәбиәтенә аяҡ баҫҡан күп кенә йәш ҡәләмдәштәремде мин моңло Муса Ғәли шишмәһенән көс-ҡеүәт алып урғылған, илһам һәм дәрт татып яҡтыға атлыҡҡан яңы шишмәләргә лә оҡшатам.

Йылдар һәм ижад. Ғүмер һәм әҙәбиәт. Былар Муса ағай өсөн айырылғыһыҙ төшөнсәгә, бер бөтөнгә әйләнгәндәр инде. Шиғырҙар, поэмалар, повестар, пьесалар, тәнҡит мәҡәләләре, хәтирәләр, юл яҙмалары...

Тынғыһыҙ әҙәби эшмәкәрлек, эҙләнеү һәм талапсанлыҡ, эскерһеҙлек һәм тоғролоҡ — Муса Ғәли шәхесен ҡылыҡһырлар төп сифаттар. Уның хаҡында ауыҙ тултырып: «Муса Ғәли — әҙәбиәтебеҙҙең намыҫы ла», — тип өҫтәй алабыҙ. Уҙған быуаттың 80-се йылдарында Мостай Кәрим, Рәсүл Ғамзатов, Сибғәт Хәким, Яков Ухсай, Назар Нәжми, Давид Кугультиновтар рәтендә Муса Ғәли шиғриәте лә Рәсәй милли әҙәбиәттәре күгендә сағыу йондоҙ булып балҡыны, һәм ул үҙенең ил алдындағы бай поэтик ижады менән дә, тынғыһыҙ әҙәби-ижтимағи эшмәкәрлеге менән дә быға тулыһынса лайыҡлы йәшәне.

Муса Ғәли — башҡорт әҙәбиәтенең иң сағыу таланттарының береһе булды. Бөтә ижадын халҡының күңел дарьялары сайҡалыуын һәм сайпылыуын йырлауға бағышланы, башҡорт әҙәбиәтенә хеҙмәт итеүгә бар ғүмерен арнаны. Ул бөгөн әҙәбиәтебеҙ йөгөн бергәләп тартып барған урта һәм йәш быуын әҙиптәренең күбеһе өсөн ихлас ярҙамсыл, оло ҡәләмдәш, яҡын дуҫ, кәңәшсе ағай ине.

Байтаҡ сит илдәрҙә, алыҫ һәм яҡын ерҙәрҙә ул, башҡорт шағиры булараҡ, киң танылды, беҙҙең шиғриәтебеҙ офоҡтарын киңәйтте.

Муса Ғәли ижады халҡыбыҙ күңелен оҙаҡ нурлар, илһамландырыр, һоҡландырыр әле. Шулар өсөн рәхмәт һиңә, Муса ағай!

## Аҡ шишмә

*Атаҡлы шағир Муса Ғәлиҙең яҡты иҫтәлегенә*

Үтә күренмәле көҙгө мәлдә
Үтә моңһоу сыңлай Аҡ шишмәң.
Үтеп күпме юлдар, сарсағанда
Аҡ шишмәңдән ятып һыу эсәм.
Булыр һымаҡ бер аҙ тыйнаҡһыҙлыҡ
Аунау изге инеш ярында.
Тыңла, шишмә тарих бәйән итә,
Күҙ алдыңа теҙеп барын да.
Ниҙәр генә күреп-кисермәгән
Аҡ шишмәңдең оҙон ғүмере.
Быуаттарҙың баҙлай төпкөлөндә
Ярҙарында ҡалған күмере.
Юлсыларҙың, дәрүиш, мосафирҙың
Берҙәй ҡандырған ул һыуһынын.
Изге уйлы кешеләргә генә
Пәйҙә булған бында Һыуһылыу.
Аҡ шишмәгә килгән Аҡмулла ла,
Сыҡҡанында алыҫ сәфәргә,
Шишмә йырын тыңлап тынысланған,
Сәй ҡайнатҡан ярҙа сәхәрҙә...
Ҡайтыр өсөн ҡабат Аҡ шишмәгә
Нәҙер әйткән күпме ауылдаш!
Шишмә иҫкә ала уландарын,
Яҙмыштары янғас дауылда.
Һин дә кистең утлы даръяларҙы,
Ярҙа әҙер усаҡ көтмәне.
Аҡ шишмәң гел төштәреңә инде,
Телеңдән дә тәме китмәне.
Аҡ шишмәңдең эсһәң шифа һыуын,
Китер инең бермә йәшәреп.
Әммә ғүмер генә етмәй икән
Йырлар өсөн тынмаҫ шишмәне.
Шишмәң һаман йырлай. Уның йырын
Туҡтаталмаҫ, шөкөр, бер кем дә.
Әрнеү тына — шишмә сылтыраһа,
Ер йәшәрә — дымы бөркөлһә.

Тыуған ерҙең көмөш шишмәләре —
Мәңге тынмаҫ, һүнмәҫ хис икән.
Сит яҡтарҙа кисһәң — кис даръялар,
Үҙ шишмәңдән моңдар эс икән!
Ҡарамайса ҡыуан елдәргә лә
Шишмә йырлай, сыңлай, бирешмәй...
Һинең гәлсәр моңло шиғриәтең —
Үҙе мәңге сыңлар аҡ шишмә.

2005 й.



## Нәжибәк Хафизов
## (1921—1989)

## Ирәмәлдең ҡар эҫеһе

Ҡистән яуған епшек ҡар төнгө сатлама һалҡында ҡапыл ғына туңған да, иртәнге ойоп торған һиллектә аяҡ аҫтында иңрәгәндәй тауыш сығарып шығырлай. Урамда һирәк-мирәк эшкә юлланыусылар ғына күренә.

Көн дә йөрөгән таныш урамда бына-бына ул осрар һымаҡ. Сөнки ул гел ошо иртәнге мәлдә Цюрупа менән Коммунистик урамдар сатындағы матбуғат кибетенән бер талай гәзит алып, ғәҙәтенсә тәмәкеһен борҡоратып, һалмаҡ ҡына атлап ҡайтып килер һәм миңә ҡаршы осрар ине. Әйе, ул әле генә арабыҙҙа йөрөгән кеүек, һаман да урамда тап булыр кеүек. Ә уйлап-барлап ҡараһаң, ул арабыҙҙан киткәнгә инде байтаҡ ғүмер аҡҡан да.

Эй, ғүмер... Үтәһең дә аяуһыҙ, ай үтәһең... Тәндәр эҫеле-һыуыҡлы булып китә. Сатнама һыуыҡтан ҡоростай шыҡырлап туңған ҡар табандарҙы өтә кеүек. Ҡар эҫеһе биттәрҙә яна, тынды ҡура. Мин уны йәнә осратмаммы тип ҡабаланып атлайым. Аяҡ аҫтында ҡар аяныслы шығырлай. Әллә ҡарҙың ошо урамдан иртәле-кисле үтеп йөрөгән теге ағайҙы хәтерҙән юймаһыңмы, онотмаһыңмы тип иҫкәртеүеме был, әллә, аҡ түбәләре болоттарға олғашҡан

Урал тауҙарынан, Ирәмәлдең үҙенән осоп килеп яттыҡ әле беҙ, тип бер аҙ маһайыуымы йәиһә...

Ҡар шығырлауына әүрәп, мин уйҙарым менән күгәреп ятҡан Урал-тау теҙмәләренә, йәшмәләре емелдәгән Учалы тарафтарына уҡталам. Сөнки миңә бынан байтаҡ йылдар элек урамыбыҙҙа һәр көндө һәр иртәлә тиерлек осрап торған яҙыусы ағай Нәжибәк Шаһикамал улы Хафизовты иҫемә төшөрә улар: Учалы яҡтары, Урал йылғаһы, Ураҙ ауылы. Сөнки 1937 йылда (йылы ла ниндәй бит әле!) Өфөләге Башҡорт театр училищеһына уҡырға килгән ун алты йәшлек егеттең ғүмер юлы ғәзиз тыуған яҡтарынан — Урал (Яйыҡ) буйындағы Ураҙ ауылынан башланған.

Күңелендә ташып барған хис-тойғоларҙы ҡағыҙға төшөрөү теләге күптән тойолһа ла, башта егет ашыҡмай. Әммә һуғышта үлемдең күҙҙәренә ҡараған яугир матрос, тулҡын-тулҡын булып килгән кисерештәрҙән бүтәнсә арына алмағас, ҡәләмгә тотона. Уның тәүге етди очерк һәм хикәйәләре, бер шаршаулы пьесалары республика матбуғаты биттәрендә 1947—1948 йылдарҙа күренә башлай.

Әҙәби ижад менән ныҡлы шөғөлләнеү теләге уны журналистикаға алып килә. 1954 йылдан ул Башҡортостан радиокомитетының әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге мөдире, унан һуң «Һәнәк» журналында әҙәби сотрудник.

1958 йылдан, йәғни Башҡортостан яҙыусыларының III съезынан һуң, Нәжибәк Хафизов Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яуаплы секретары итеп һайлана. Өс йыл эшләгәндән һуң ул Мәскәүҙә СССР Яҙыусылар союзы ҡаршыһындағы Юғары әҙәби курстарҙа уҡый.

Нәжибәк Хафизовтың артабанғы хеҙмәт юлы һәм ижад эшмәкәрлеге ике ҙур сәнғәт коллективына — Башҡорт дәүләт филармонияһына һәм Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрына бәйле. Был ике коллективта ул ун биш йыл һуҙымында яуаплы вазифалар башҡара: директор булып эшләй. Һәм, әйтергә кәрәк, ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем яҙыусы Н.Хафизов театр менән дә, филармония менән дә тығыҙ ижади бәйләнештә йәшәне, араны өҙмәне. Хатта улай ғына ла түгел: әгәр актерлыҡ һәләте уны драматург яһаһа, театр һәм концерт коллективы етәксеһе булараҡ, сәхнә әҫәрҙәренә ҡытлыҡты тойоп, яҙыусылыҡ эшенә үҙе тотонор булды. Уның эш араһында ғына яҙылған «Осрашыу», «Күршеләр», «Үҙ кеше», «Ҡунаҡта», «Дуҫтар», «Яңылышыу», «Көҙҙөң бер көнөндә» һәм башҡа шундай егерменән ашыу бер шаршаулы пьесалары Башҡортостан һәм Татарстан театрҙарында ҡуйылып килде.

Башҡорт дәүләт филармонияһы өсөн ул «Кәтүк менән Бағанай» образдарын ижад итте. Был образдар эстрада сәхнәләренә ғүмерлеккә күтәрелде.

Әҙип драматургияның бәләкәй формаларында әүҙем эшләп тә ҙур эш башҡарҙы. Ул яҙған скетчтар, интермедиялар, бер шаршаулы пьесалар, пародиялар республика сәхнәләрендә сығыш яһаусы артистар репертуарҙарын оҙаҡ йылдар биҙәп килде. Яҙыусының көлкөлө хикәйәләре, сәхнә әҫәрҙәре халыҡ мәҙәктәренән, әңгәмәләренән үҫеп сыҡҡандай. Берсә улар ҡояш ярсыҡтары кеүек балҡып-сағылып китә лә, күңелдәрҙе йылытып, иркәләп, байытып ебәрә. Берсә көтмәгәндә уйға һала, үҙ донъяңды байҡап ҡарарға мәжбүр итә.

Нәжибәк Хафизов сит ил, рус һәм совет драматургтарының әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеү өлкәһендә күп хеҙмәт һалды. Уның тырышлығында Толстой, Чехов, Д.Лондон, Арбузов, Ҡравченко геройҙары беҙҙең телдә һөйләшеүгә өлгәште.

Яҙыусының йәнә бер ижад тармағы хаҡында һүҙ әйтмәү мөмкин түгел. Ул Ҡазан киностудияһының Башҡортостан дубляж бүлексәһендә 42 йыл бер өҙлөкһөҙ — ғүмеренең һуңғы көндәренә тиклем! — хеҙмәттәшлек итте. Был дәүер эсендә ул дубляжда режиссер ҙа, актер ҙа, редактор ҙа, укладчик та, тәржемәсе лә булды. Был хеҙмәттәшлектең һөҙөмтәләре, әле килеп бер епкә теҙгәс, һоҡланырлыҡ та, хайран ҡалырлыҡ та: Н.Хафизов башҡортсаға әйләндерелгән ҡырҡлап нәфис фильмдың режиссеры булған, йөҙҙән ашыу кинофильмды үҙе тәржемә иткән! Нәжибәк Шаһикамал улы, тәржемәсе булараҡ, күп осраҡта «ашығыс ярҙам» да ине. Ҡисектергеһеҙ заказдарҙы ла ул һис бер рыяһыҙ, яуаплылыҡ, юғары зауыҡ һәм ҙур теләк менән башҡарыр ине.

Үҙе иҫән саҡта уның ни бары өс кенә китабы донъя күрҙе: «Күршеләр» (пьесалар) — 1960, «Алтын финиш» (очерктар) — 1962, «Командаһыҙ капитан» (пьеса) — 1966.

Нәжибәк Шаһикамал улының эш өҫтәлендә күп йылдар буйы туплаған, әммә 1981 йылда үҙенең 60 йәшендә лә донъя күрергә насип булмаған юмористик хикәйәләре, пьесалар, скетчтар йыйынтығы ятып ҡалғанлығы, яҙылып та бер редакцияға ла тәҡдим ителмәгән повесы барлығы асыҡланды. Был китап, аллаға шөкөр, тулы итеп әҙерләнгән күләмдә, ниһайәт, 1996 йылда «Һалҡын тулҡындар» исемендә нәшер ителде.

Нәжибәк Хафизовтың әҙәби мираҫын өйрәнеү комиссияһы рәйесе, шулай уҡ мәрхүм яҙыусы Ғәзим ағай Аллаяров әҙиптең «Һалҡын тулҡындар» повесына ҡарата ул саҡта биргән аңлатма һүҙендә ошондай юлдар иғтибарҙы үҙенә тарта: «Нәжибәк Хафизовтың үҙ ғүмерендә күп яҙыуы, әммә башҡаларға уҡытмайынса, үҙендә генә һаҡлап ятҡырыуы минең өсөн бик сәйер хәл булып тойола, әлбиттә».

Ғ.Аллаяровтың әйткәндәренә мин дә уның йәнә бер сифатын өҫтәр инем: Нәжибәк Шаһикамал улы үҙ шәхесенә, үҙ ижадына ҡарата үтә иғтибарһыҙ ҙа булды шикелле. Үҙенә ниндәйҙер исемдәр юллап, әҫәрҙәрен сығарырға тырышып, китабын тиҙләтеүҙе хәстәрләп йөрөгән сағын мин, мәҫәлән, уның менән байтаҡ йылдар аралашһам да, күрмәнем. Кеше холҡондағы был һыҙаттарҙы мин ҡабартып күрһәтер өсөн әйтмәйем, ә бары тик мәрхүмдең булмышы, ҡәләмдәштәре араһында үҙен тотошо, әҙәп йөҙө хаҡында ғына уйланам.

Шуғалырмы, әллә бүтән сәбәптәнмелер, ул күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәҫ кеше ине. Уның ваҡ-төйәктән кәйефе ҡырылып, балтаһы һыуға төшөп йөрөгән мәлен күргәндәр булмағандыр.

Учалы яғы, Йайыҡ буйы, Ураҙ ауылы. Һоҡланғыс тәбиғәтле, матур төбәктәр. Эргәлә генә мөһабәт күтәрелеп күренеп ятҡан Ирәмәлдә көҙөн ҡар бик иртә төшә, ә яҙын тау түбәһе ҡарҙан иң һуңғы булып әрселә. Әммә үҙ яғындың һалҡыны ла яҡын тиҙәр бит...

Ураҙ егете Нәжибәк Хафизовта ла мин ошо сифаттарҙы күргәндәй булдым. Унда тап Ирәмәл йомартлығы менән Ирәмәл ҡырыҫлығы өҫтөнлөк итә ине. Һәм был ауылдан бер юлы өс яҙыусының үҫеп сығыуы ла юҡҡа түгелдер. Һуғыштың утлы ғәрәсәтен үтеп ҡайтҡан Ғәзим Аллаяров, Талха Ғиниәтуллин һәм Нәжибәк Хафизовтар — тап ошо таланттар төбәгенең аҫыл уландары. Улар ижадында сал Ирәмәл кисергәне-күргәне менән аҡ Йайыҡ яҙмышы үҙҙәренең бөтә төрлөлөгөндә, үҙлелегендә һәм ябай асылында сағылғандай. Әҙәби йәки сәнғәт ижады тәбиғи ерлекле, халыҡсан нигеҙле булыуы менән ғүмерлеләр.

Яҙыусы Нәжибәк Хафизовтың уҡыусыға әле тулыһынса килеп етмәгән әҙәби-драматик ижады тураһында уйлағанда мин уның шәхесе, тәбиғи булмышы тирәһендә күберәк уй йөрөтәм. Сөнки беҙ бөтәбеҙ ҙә тыуған ерҙән, ил рухынан, халыҡ асылынан сыҡҡанбыҙ. Ошо төп төшөнсәләргә тоғролоҡ ҡына әҙәмдәрҙе кеше итеп йәшәтә.

Яҙыусы һәм яугир Нәжибәк Хафизов та, кеше булараҡ, ошо төшөнсәләргә хыянатһыҙ йәшәне, әҫәрҙәрендә лә ошо ябай ҡанундарҙы кәүҙәләндерҙе.

Таулы һәм даулы, алыҫ Учалы тарафтарында, оло юл өҫтөндә ятҡан Ураҙ ауылы зыяратында ерләнде яҙыусы Нәжибәк Шаһикамал улы Хафизов. Бында ла ул ҡәҙер-хөрмәтле: ҡәбере һәр саҡ мәктәп, ауыл Советы хакимиәте иғтибары үҙәгендә, ҡараулы, таҙартылған.

Иҫәндәрҙең ҡәҙерен бел, үлгәндәрҙең ҡәберен бел, тигәндәй, ерҙән киткәндәрҙең хәтерен ихтирам итеп, беҙ, асылда, үҙ күңелебеҙҙе сафлайбыҙ, үҙ рухыбыҙҙы нурлайбыҙ...

Амин, артабан да шулай булһын!

## Ибраһим Ғиззәтуллин
## (1918—1992)

### Ҡесерәймәҫ бейеклек



Яугир яҙыусы Ибраһим ағай Ғиззәтуллин менән һәр осрашыуым мине бик ныҡ тулҡынландыра ине. Был тулҡынланыуҙың төп нигеҙендә һуғыш касафаты һәм кешенең ихтыяр ныҡлығы ята, булһа кәрәк. Тәнендә 23 ауыр йәрәхәт булыуына ҡарамаҫтан, ул, һуғышҡа үс иткәндәй, бөтә ихтыяр көсөн туплап, йәшәү өсөн көрәште һәм еңеүсе булып ҡалды...

Ә Ибраһим Ғиззәтуллинды 1941 йылдың көҙөндә аяҡтан йыҡҡан һуғыш шул уҡ көҙҙә мине лә атайҙан мәхрүм итте. Беҙҙең генә ғаиләлә алты бала етем ҡалды... Ә ауылда? Ә бүтән меңләгән ауылдарҙа?..

Бына шуларҙы баштан кисереү ғүмерлек, уңалмаҫ йәрәхәтле һуғыш ҡаһарманы Ибраһим ағайҙың һыҙланыуҙарын белгертмәҫкә тырышыуы, үлемдең күҙҙәренә ҡараған кеше менән һәр осрашыу минең өсөн үҙе үк тетрәндергес күренешкә әйләнер ине.

Миңә уның менән баш ҡалабыҙ Өфөнөң Дан бульвары урамындағы фатирында ла, Түбәнге Әрмет ауылында үҙҙәренең йортонда йәшәгәндә лә осрашырға, донъя хәлдәре, әҙәбиәт хаҡында һөйләшергә, фекер алышырға тура килде.

Ибраһим ағайҙың самаһыҙ ябайлығы, кеселеклелеге һәм итәғәтле булыуы ихлас әңгәмә ҡорорға үҙенән-үҙе ылыҡтырып торор ине. Ул бөтә нәмә менән дә ҡыҙыҡһыныр, һорашыр. Үҙенең уй-ҡарашын белдерер.

Бына ошондай тормошҡа актив мөнәсәбәтле кеше булғанғалыр ҙа, Ибраһим Ғиззәтуллиндың бай әҙәби ижады уҡымлы һәм фәһемле романдары, повестары, хикәйәләре менән айырылып тора. «Ғашиҡтар баҡсаһы», «Үлгәндән һуң утыҙ йыл» повестары, «Икенсе күкрәү» һәм «Икенсе бейеклек» романдары менән ул уҡыусылар күңелен әсир итте. Бөгөн ул башҡорт әҙәбиәтендә иң яратып уҡылған яҙыусыларыбыҙҙың береһе.

Ибраһим ағайҙың бер үҙенсәлекле холҡо хаҡында ла әйтке килә: уның кеше йәнле булыуы, кешеләр менән даими күрешеп, аралашып тороуға сарсап йәшәүе.

Шуғалыр ҙа уларҙың йортонан кеше өҙөлмәне: ауылдаштары, яҡташтары, дуҫтары һәм ҡәләмдәштәре, мәктәп балалары тиһеңме, ер аяғы-ер башынан урап ҡайтҡан таныш-белеш һәм бөтөнләй сит кешеләр булһынмы — ҡаһарман рухлы яугир яҙыусыны күрергә ашығырҙар ине. Улар аша, улар менән әңгәмәләрҙән Ибраһим ағай ил һулышын тойҙо, халыҡтың йәшәйешен күҙалланы.

Йәйҙәрен ауылға күсеп ҡайтыуы (йәйләүгә сығыу), көҙ еткәс инде ҡалаға ҡайтып йәшәүе (ҡышлауға ҡайтыу) лә ошоға бәйле. Үҙенең тормош һәм кешеләр менән бәйләнеше даирәһен мөмкин тиклем киңәйтеү теләгенән дә ине был хәл.

Таныш-тонош кеше килмәгәнерәк осорҙа йә яңғыҙы ғына ҡалған ҡайһы бер һирәк мәлдәрҙә эсе бошоп китеп, китаптарын ҡулына алғандай итеп, ҡарап-һыйпап, төрлө хәлдәрҙе иҫенә төшөрөр, ҡәләмдәштәрен телгә алыр, хәтирәләргә бирелер...

Ошонда Ибраһим ағайҙың миңә үҙ ҡулы менән яҙып биргән автографы хаҡында әйткем килә. 1987 йылдың ҡара көҙөндә ул миңә үҙенең «Үлгәндән һуң утыҙ йыл» китабын бүләк иткәйне. Тыңлауһыҙ бармаҡтарына авторучка ҡыҫтырып, ғүмерлек тормош иптәше Зөләйха апай ярҙамында ул китабының титул битенә, миңә арнап, шундай һүҙҙәр сыймаҡлаған:

«Юлың — аҡ, һүҙең хаҡ булһын, Ҡәҙим! И.Ғиззәтуллин. 13.11.87 йыл».

Ябай ғына изге теләк һүҙҙәре. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына һүҙҙәр теҙмәһендә күпме күңел ихласлығы, аҡыл бөйөклөгө лә! Һәр хәлдә, шәхсән мин үҙем был яҙмаға тәрән мәғәнә лә, ҙур әһәмиәт тә биреп ҡабул иттем, сөнки ул ябай кеше тарафынан ғына яҙылмаған. Өҫтөнә тауҙай ауырлыҡтар ишелеп төшөүенә ҡарамаҫтан, һынмаған көслө рух эйәһе яҙған уны.

Хәҙер инде бына, Ибраһим ағай менән осрашыуҙарҙан һуң байтаҡ йылдар үткәс, шундай һығымтаға киләм: бәлки, уның характерындағы тап бына ошо һыҙаты йәшәүгә дәрт, киләсәгенә өмөт уятып торғандыр, ауыр һуғыш яралары эҙемтәләре менән көн һайын, сәғәт һайын алышҡанда, һәр һулыш өсөн көрәш алып барғанда уға булышлыҡ иткәндер.

Автографлы китаптың беренсе битен асыу менән повестың эпиграфын уҡыйым: «Өмөтһөҙ шайтан. Өмөтө булмаһа, йәшәй алмаҫ ине кеше. Ниндәй хәлгә төшһә лә, алдында саткылар күрә ул: йым... йым... йым!.. Ошолар уны алға әйҙәй, яҡтыға саҡыра... (Халыҡ әкиәтенән)».

Бына уның нигеҙе, башланғысы, аҫыл сығанаҡтары! «Халыҡ әкиәтенән» тип әйтелһә лә, асылда ул халыҡ аҡылы, халыҡ философияһы, халыҡ идеологияһы ла. Был эпиграфта яҙыусы, Бөйөк Ватан һуғышының беренсе группа инвалиды Ибраһим Ғиззәтуллиндың йәшәү принциптары ла, ижад ҡануны ла ярылып ята. Һәм был принцибына ул үҙенең бөтә ғүмере буйына, бөтә ижадында тоғро булды, тоғро ҡалды. Уның әҫәрҙәренә баһа биргән әҙәбиәт ғалимдары ла (Әнүр Вахитов, Нур Зарипов) быны яугир яҙыусы ижадының үҙәк сифаттарының береһе тип билдәләй.

Ибраһим ағайҙың һуңғы романы «Икенсе бейеклек» тип атала. Әҫәр ауыр һуғыш аша үтеп, дошман өңөнә еткән, рейхстаг түбәһенә Ҡыҙыл байраҡ ҡаҙаған, Еңеү бейеклеген яулашҡан ил батырҙары хаҡында.

Ә инде ошо утлы ғәрәсәт эсендә ҡалып, унан ярты ғәрип булып ҡайтып, яңынан ижади хеҙмәткә баҫырлыҡ көс тапҡан, яйлап-яйлап Ижад бейеклегенә күтәрелгән яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллиндың ҡаһарманлығын нисек баһаларға, ниндәй үлсәүҙәр менән үлсәргә мөмкин?! Минеңсә, ул художестволы әҫәрҙәре менән башҡорт әҙәбиәтендә үҙенең — Ибраһим Ғиззәтуллин бейеклеген булдырҙы, һәм был Ижад бейеклеге күп йылдар үткәндә лә уҡыусылар алдында кесерәймәйәсәк. Ҡесерәймәҫ бейеклек ул — Ибраһим Ғиззәтуллиндың бейеклеге!

Яҙыусы Ибраһим Ғиззәтуллин тураһында һөйләгәндә, уның тормош юлдашы Зөләйха апайҙы телгә алмау ҙур гонаһ булыр ине. Сөнки ул Ибраһим ағайҙың ҡатыны, балалар әсәһе генә түгел, рухландырыусыһы ла, төп ярҙамсыһы ла, шәхси секретары ла булды. Бер-береһенә иҫ киткес тап килгән был ике шәхес тураһында ғалим Нур Зарипов «Ҡаһармандар» тигән мәҡәләһендә 1996 йылда бына нимә тип яҙҙы: «Ибраһим Ғиззәтуллиндың ниндәй аяныс хәлдә лә күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәүе, әҙәби ижад кеүек ифрат ауыр эшкә рухи көс табыуы — үҙе бер баһадирлыҡ булһа, ҡатыны Зөләйха ханымдың ныҡлығы — иш янына ҡуш батырлыҡ ул. Был ике заттың тормоштарын айырып ҡарап булмаған кеүек, уларҙың характерҙары ла асылда бер төҫлө — ҡаһармандарса!»

Бына шуға ла мин Ибраһим ағай Ғиззәтуллин тураһындағы һүҙемде уның ғүмерлек хеҙмәттәше һәм юлдашы Зөләйха Тәхәү ҡыҙы Ғиззәтуллинаға арналған шиғырым менән тамамлайым.

### Ҡайғы һауыты

*Хеҙмәт ветераны Зөләйха апай Ғиззәтуллинаға*

Ҡайғыға ҡайғы оҡшамай,
Ҡайғылар төрлө була.
Һәр кемдең ғүмер һауыты
Үҙ ғәме менән тула.
Ҡайғы һауыты бушамай —
Тулып торорға тейеш,
Ҡемдер хәсрәттәрен унда
Ҡойоп торорға тейеш.
Ҡайғыға ҡайғы оҡшамаҫ,
Ғүмерҙәр төрлө булғас.

Ҡайғы һауыты бушамаҫ,
Тамсылап хәсрәт тамғас.
Һинең ҡайғы һауытың да
Бутәндекеләй түгел,
Сөнки ҡайғың да — илдеке,
Бер үҙеңдеке түгел.
Ҡайғы һауытың бөҫкәрмәй,
Ҡайғың еңелдән түгел,
Бөтә ил күтәрерлекте
Күтәрә һинең күңел...

2000 й.

## Хәким Ғиләжев
## (1923—1997)



### Ҡабатланмаҫ оло шәхес

Ул 1 мартта тыуған.

Яҙғы иртәлә, иртә яҙҙа тыуыуынан да уға бер шауҡым һуғылған һымаҡ: ул һәр нәмәлә лә, ғөмүмән, был шаулы-даулы тормошта тәүгеләрҙән булып барырға яратты, тәүге һүҙҙе әйтергә булһынмы, алдан алып мәсьәләгә асыҡлыҡ индерергә тиһеңме, килеп тыуған проблемаға мөнәсәбәт белдерергә кәрәкме — Хәким Ғиләжевтың үҙ ҡарашы, үҙ тойомлауы алғасҡыла булыр, һис юғалып ҡалмаҫ, аптырап тормаҫ...

Быға уның биографияһындағы һикәлтәле тормош баҫҡыстары, киң эрудициялы кеше, күп яҡлы талант эйәһе булыуы асыҡ дәлил була алыр ине.

Яҙыусы. Шағир. Философ. Рәссам. Тарихсы. Телсе. Ғалим. Редактор. Уҡытыусы. Педагог, тәрбиәсе. Журналист. Етәксе. Ойоштороусы. Ҡәңәшсе. Остаз... Уға ҡарата әллә күпме атамалар табып, әйтеп була торғандыр.

Әҙип, әҙәбиәтсе — уның иң төп һөнәре, хеҙмәт тамғаһы, йөрәге ятҡан, йәне һөйгән эше.

Хәким Ғиләжев башҡорт әҙәбиәтендә үҙен Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан, ут-һыуҙарҙы үткән, үлемдең күҙҙәренә ҡараған яугир-әҙип булғанға ғына түгел, ә ижады менән ошо ҡаһарманлыҡты данлаған мәшһүр «46-сы һалдат» поэмаһы (1961) һәм «Погонһыҙ һалдаттар» романы (1965) менән танытты. Беҙ, алтмышынсы йылдар студенттары (БДУ-ның йәш «шоңҡарҙары»), асылда ошо әҫәрҙәрҙе уҡып үҫтек: «46-сы һалдат» (Хәким Ғиләжев), «Ҡапҡалар» (Назар Нәжми), «Ҡара һыуҙар» (Мостай Кәрим), «Ер» (Баязит Бикбай), «Һаҡмар ҡыҙы» (Рәшит Ниғмәти) — йәштәрҙең, бигерәк тә йәш ижадсыларҙың, теленән төшмәгән, иң яратып уҡылған поэмалар ине...

Хәким ағай менән беҙҙең Башҡорт дәүләт университетында тәүге осрашыу онотолмаҫ хәтирәләр уята: 1964 йылдың көҙөндә уның менән филология факультетының башҡорт-рус бүлеге студенттарының осрашыу кисәһе уҙғарылды. Хәким ағайҙың ул саҡта «Ағиҙел» журналында баш мөхәррир булып эшләп йөрөгән мәле. «Погонһыҙ һалдаттар» романы журналда баҫылып, киң ҡатлам уҡыусыларына барып еткәйне. Хәким ағай беҙгә роман өҫтөндә эшләүе хаҡында һөйләне, күп кенә һорауҙарға яуап бирҙе. Шиғырҙар, «46-сы һалдат» поэмаһынан өҙөктәр уҡыны.

«Был юлдарҙы яҙмаҫ инем, әгәр
Һулҡылдатып ярам бәрмәһә,
Йәшәп ҡалайым, тип, был донъяла,
Тик үҙ йөрәгемде һәрмәһәм, —
Был юлдарҙы яҙмаҫ булыр инем.
Яҙғы килә, хәбәр итке килә
Минән һуң да йәшәр быуынға:
Беҙ бик һөйә белдек! Тик ҡайһыбыҙ
Ҡайтып етәлмәне туйына...» —

тигән юлдарҙы авторҙың ҡалын, гөрөлдәп сыҡҡан күкрәк тауышы менән уҡыуы беҙҙе бик ныҡ тулҡынландыра, әсир итә ине.

Бына ошо алыҫ 1964 йылғы тәүге осрашыуҙан уҡ ул минең күңелгә иҫ киткес үткер, көслө рухлы һалдат, яугир-шағир булып инеп ҡалды һәм йылдар үткән һайын яңынан-яңы сифаттары, төҫ-биҙәктәре, тауыш-аһәңе, моң-һағыштары менән үҙенә арбағандан-арбай, асылғандан-асыла барған оло бер сихри донъя булып һынлана.

Моң-һағыш тигәндән.

Хәким ағайҙың үҙенсә генә бер көйләүе, үҙенсә генә бер моңо була торғайны. Табындарҙа күңелле булып китһә (дөрөҫөрәге — күңеле килһә!), ул үҙе генә белгәнсә, үҙенә генә хас бөгөлөштәр менән йырлап та алыр, һәм, оҙаҡҡа һуҙмай ғына, үҙ йырына үҙе баһа ла бирер: «Оһо! Ҡайҙан килә был тауыш!..» Беҙ уның өҙләүҙәрен дә үҙ күреп, яратып тыңлай торғайныҡ. Тамаҡ төбө менән тауыш, көй сығарыу, әйтергә кәрәк, һәр кемдең ҡулынан (һәләтенән) килә торған «эш» түгел. Ана шуны Хәким ағайҙың бик тә үҙенсәлекле зауыҡ, бер моң, бер аһәң менән башҡарыуы бары тик һоҡланыу ғына уятыр ине. Эй, замандар, эй, ғүмер!..

Хәким ағай ысын мәғәнәһендә ҡабатланмаҫ характерлы оло шәхес булды. Бары тик ошондай оло йөрәкле кешеләр хаҡында, үҙе иҫән саҡта, төрлө легендалар, анекдоттар, көләмәстәр тыуалыр. Ә Хәким ағай хаҡында әллә күпме фәһемле мәҙәктәр, әңгәмәләр һаҡлана уны күреп-белгән замандаштары күңелендә!

Ул йор (юморлы) һүҙҙәрҙе беҙ әле лә уны иҫкә алғанда һөйләп, көлөшөп алабыҙ. Хәким ағай кеүек йүнле кешеләр, яратҡан заттар хаҡында ғына шундай яҡты хәтирәләр ҡала, оҙаҡ һаҡлана торғандыр.

Ошо урында йәнә бер илгәҙәк йәнле яҡын дуҫтарыбыҙҙың арҙаҡлыһы — Рәшит ағай Солтангәрәев иҫкә төшә, ул инде торғаны бер анекдот һандығы — көләмәс оҫтаһы булды. Үҙе хаҡында ла, күңеле ятҡан ҡәләмдәштәре тураһында ла көләмәстәрен ҡойоп ҡуйыр ине. Әҙәм ышанмаҫты ысын булһа ла һөйләмә тигән әйтем бар. Ә Рәшит ағайҙың көләмәстәренә ышанмаҫ ерҙән ышанаһың. Бына ниндәй ул — ысын художестволы уйҙырманың көсө!

Хәким ағай тапҡыр телле, тос фекерле кеше ине. Уның менән әңгәмәләшеү, уның һөйләгәндәрен тыңлау — үҙе бер ләззәт булыр, ҡәнәғәтлек тойғоһо уятыр. Шулай бер ваҡыт, үҙе йәшәгән йорттан алыҫ түгел, Октябрь революцияһы урамы сатында осрашҡанда, күрешеп-һөйләшеп торғанда уның: «Күрешеүҙән ҡул йылына», — тигәне хәтерҙә. Әле килеп шуны аңланым: бәлки, ул минең ҡулды йылытырға теләгәндер ҙә...

Икенсе тапҡыр Яҙыусылар Союзы идараһында (ул ваҡытта Совет урамы, 16-сы йорттоң дүртенсе ҡатында) ултырғанда, һүҙҙән һүҙ сығып, Хәким ағай шағир Муса Сиражиҙың яңы нәшер ителгән китабын уҡып сығыуы һәм уға рецензия яҙып ятыуы хаҡында һөйләп китте:

— Мин әҙ генә уның башынан һыйпарға ла тейеш таптым. Уны былай ҙа йыш тибәрәләр. Ә минең ҡытыршы ҡул менән баштан һыйпау — тарау менән бер...

Был хаҡтағы яҙмалар 1980 йылда минең ҡуйын дәфтәрендә теркәлгән. Ул осорҙа мин Яҙыусылар Союзы идараһының ойоштороу эштәре буйынса секретары булып эшләй инем.

Ә ике йылдан һуң, 1982 йылдың ноябрендә, Хәким ағай минең өс китабымды («Утлы кисеүҙәр», «Батыр яраһы» һәм «Аҡ тирмә») берсән уҡып, улар хаҡында ҙур күләмле «Аҡ тирмәле ил моңо» тигән мәҡәләһен тамамлағайны. Мәҡәлә яҙғанында мин уның янына, Дим буйындағы Аҡлан дачалар поселогына барҙым. Хәким ағай баҡса йортонда бер үҙе генә йәшәп ята (Лена еңгә институтта эшләй ине). Минең поэмалар, шиғырҙар, тыуған яғым, туған-тыумасаларым, бығатиклемгe тормош юлым, әлеге хеҙмәтем тураһында ул бик ентекләп һорашты. Беҙҙең әңгәмә бик матур юҫыҡта барҙы. Ул минең өсөн — әле ижад юлын башлаған ғына әҙип өсөн — бигерәк тә фәһемле, үтә лә ҡәҙерле осрашыу, фекер алышыу булды. Хәким ағайҙың бығаса төрлө йыйылыштарҙа сығыштарын ишеткән кешегә, әле бындай ябай обстановкала, баҡса өйөндә ултырып, мәтрүшкәләп, ҡарағатлап сәй эсә-эсә, оло талант эйәһен тыңлау миндә иҫ киткес йылы, яҡын тойғолар уятты, онотолмаҫ хәтирәләр ҡалдырҙы.

Хәким ағайҙың һуңғы шиғыр китабы «Аҡлан шишмәһе» 1998 йылда донъя күрҙе. Аҡлан. Йәмле Дим буйындағы был дачалар ауылына Хәким ағайҙың байтаҡ ижад ғүмере бәйле, һуңғы йылдарҙа ул бында туған тәбиғәтебеҙҙе һаҡлауға арналған, оран һалған байтаҡ «уҫал шиғырҙар», фәлсәфәүи лирика әҫәрҙәре яҙҙы. «Аҡлан шишмәһе» — шағирҙың һуңғы йылдары ижадын эсенә алған һәм элек яҙылған әҫәрҙәренең гүзәл өлгөләрен (шул уҡ «46-сы һалдат») үҙенә туплаған китап. Йәнә: шағирҙың иң өлгөргән, тормош тәжрибәһе туплаған шәхестең иң мөҡәддәс күңел яҙмалары булыуы менән ҡәҙерле ул. Ҡәҙерле рухи ҡомартҡылар ғына түгел, ә фәһемле, оло ғүмер йәшәгән ижадсының донъя менән бәхәсе лә, әрнеүҙәре лә, моң-һағыштары ла, «аҡҡош йыры» ла...

Хәким ағайҙан беҙ, йәштәр, күп нәмәгә өйрәндек. Тапҡыр һүҙе, тура һүҙлелеге генә лә ни тора! Әҙәбиәттең сафлығы, намыҫ, әхлаҡ таҙалығы өсөн көрәшсе булыуы ла уның ана шул ҡаты характерынан, һүҙгә тоғролоҡ сифаттарынан килгәндер. Оло шәхес булыуы еңел булмағандыр. Шуға ла ҡабатланмаҫ шәхес.

2002 й.



## Ғәли Ибраһимов (1919—1989)

## Тамырҙарға тоғролоҡ

Ғәли ағай Ибраһимовты мин БДУ-ла уҡыған сағымда уҡ (1963—1968 йылдар) күргәйнем, уның студенттар менән осрашыуға бер-ике мәртәбә килгәне хәтерҙә.

Аҙағыраҡ, йәғни етмешенсе йылдар башында, «Ағиҙел» журналында яуаплы секретарь һәм баш мөхәррир урынбаҫары булып эшләгән мәлендә лә уның менән йыш күрешергә, һөйләшергә, кәңәш-төңәштәрен күп тапҡырҙар ишетергә тура килде. Минең СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында фольклор буйынса аспирантурала уҡығанлыҡты белгәс, уның миңә теләктәшлеге артты, кәңәштәре лә күбәйҙе. Был осор Ғәли ағайҙың ижад багажының иң һәлмәк һәм иң төп әҫәре — «Ҡинйә» роман-эпопеяһының беренсе, икенсе китаптары өҫтөндә ҡаты эшләгән мәле. Уй-хыялдары менән үткәндең оло тарихи ваҡиғалары эсендә ҡайнау, архив материалдарын, руда аҡтарғандай, иләктән үткәреү уның күп ваҡытын алғанға күрәлер, ул 1972 йылда «Ағиҙел» редакцияһынан ваҡытлыса китеп, профессиональ ижадҡа башкөллө сумды.

Мин 1972—1977 йылдарҙа «Ағиҙел» журналында эшләгән осорҙа Ғәли ағай редакцияға даими килә, хәл-әхүәл һорашып, кәйефтәребеҙҙе белешеп, йомоштарын йомошлап китер ине. Был ваҡытта Ғәли ағайыбыҙ — иң популяр яҙыусыларҙың береһе: «Ҡинйә» романының беренсе китабы журнал аша уҡыусыларға барып етеп, 1977 йылда айырым китап булып баҫылып та сыҡҡайны.

Етмешенсе-һикһәненсе йылдарҙа Ғәли ағай менән байтаҡ юлдарҙа йөрөргә, төрлө осрашыуҙарҙа ҡатнашырға, әҙәбиәт байрамдарында бергә булырға тура килде. Ошондай ижади сәфәрҙәребеҙҙең береһе 1979 йылдың июлендә Мәләүез ҡалаһында һәм районында булғайны. Алты көнлөк сәйәхәттә беҙ: Ғәли ағай, уның хәләл ефете Зөләйха апай, ғалим, тәнҡитсе Ҡим Әхмәтйәнов, шағирә Әнисә Таһирова һәм мин — ҡаланың «Мәләүезхимстрой» тресында, һөт-консерва һәм ит комбинаттарында, химия заводында, тимер-бетон конструкциялар заводында, автомобилдәр ремонтлау предприятиеһында, ағас эшкәртеү комбинатында эшселәр алдында сығыш яһаныҡ, шунан райондың иң ҙур хужалыҡтары һаналған «Арыҫлан» совхозында, «Нөгөш», «Ағиҙел», «Урал», Ленин исемендәге, Мәжит Ғафури исемендәге колхоздарҙа ауыл эшсәндәре менән ихлас, йылы осрашыуҙар үткәрҙек. Мәләүез ҡала һәм район комитетының беренсе секретары Әҙһәм Ғәни улы Шәрәфетдинов, юғары эрудициялы, әҙәбиәткә ҙур ихтирамлы шәхес, халыҡ менән осрашыуҙарыбыҙҙың ҡайһы берҙәрендә үҙе лә ҡатнашты.

Башҡорт әҙәбиәтенең данын күтәргән «Ҡинйә» романының авторын Мәләүез ерендә айырыуса бер йылылыҡ, яҡынлыҡ һәм ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршы алдылар. Романын яҙған мәлдә Ғәли ағай материалдар йыйып та, хатта бер генә ер-һыу атамаһын аныҡлау өсөн дә был яҡтарҙа бер нисә мәртәбә булып киткән. Арыҫландамы, Смаҡ (Тамъян) ауылында булһынмы, Һарыштамы, Иштуғандамы йәки Аптыраҡтамы — бөтә урындарҙа ла яҙыусының сығышын йотлоғоп тыңлайҙар, һорауҙар яуҙыралар. Осрашыу иҫтәлеге итеп, оло әҙиптең ҡултамғаһы менән романын үҙ ҡулынан алыу —

һәр кем өсөн оло бәхет. Сал быуаттар төпкөлөндә ҡалған хәл-ваҡиғаларҙы һәм Арыҫлан Аҡҡулов, Ҡинйә Арыҫланов, Салауат Юлаев, Ҡаранай Моратов, Ҡәнзәфәр Усаев кеүек ил батырҙарын үҙенең үлемһеҙ әҫәре аша яҡты донъяға сығарған Ғәли ағай уҡыусылары алдында, ысынлап та, бер тылсым эйәһе һымаҡ ине.

Мәләүез ерендәге осрашыуҙар программаһы шул тиклем тығыҙ ине, беҙ алты көн эсендә егермеләгән урында булырға өлгөрҙөк. Хатта планды арттырып та үтәнек шикелле: пионер лагерында, ҡаланың тыуған яҡты өйрәнеү музейында һәм районның «Октябрь юлы» гәзите хеҙмәткәрҙәре менән дә осрашыу үткәрергә форсат таптыҡ.

Музейҙа бер ҡыҙыҡ хәл булды. Экспонаттарҙы ҡарап йөрөгәндә Ғәли ағай, фронт юлдарын иҫенә төшөрөптөр инде, бер хәрби әйбергә ҡарап, оҙаҡ китмәй торҙо. Мин эргәһенә барҙым:

— Нимә, Ғәли ағай, әллә үҙегеҙ бүләк иткән берәй таныш экспонатты осраттығыҙмы? — тим.

— Үкенескә ҡаршы, мин уны алып ҡайта алманым, — тине ул кескәй генә, кеҫәгә һыймалы, тимер һалдат фляғаһына күрһәтеп. — Ҡәҙим, һин ошо фляганан эҫе һыу эсәр инеңме? — тип һораны.

Мин уның тел төбөн аңлап алдым:

— Башҡа төшһә, Ғәли ағай, эсәр инем, һыу түгел, спирт булһа ла, — тигән булдым.

— Ҡыҙыу һуғыш ваҡытында флягалағы һыу шул тиклем, ҡайнаған кеүек, ҡыҙып, йылынып китә торғайны, иренгә тейҙерерлек булмай хатта... — тине яугир ағай, моңһоу ғына йылмайып.

Редакциялағы осрашыуҙы гәзиттең башҡортсаға тәржемә буйынса редактор урынбаҫары, СССР Журналистар союзы ағзаһы, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Бәҙри ағай Бикмаев ойошторҙо, һуңынан иҫтәлеккә фотоға төштөк.

Иҫтәлектәр, хәтирәләр...

Үткән дәүерҙәрҙең теге йәки был ваҡиғалары ҡуйын дәфтәрҙәрендәге яҙыуҙарҙан, китаптарҙан йә һаҡырыу ҡағыҙҙарынан ҡысҡырып, һәр ҡайһыһы йәнле иҫтәлектәр уятып, күҙгә ҡарап, өнһөҙ өндәшеп торғандай.

1980 йылдың декабрендә РСФСР яҙыусыларының V съезы уҙғарылды. Был оло форумға Башҡортостан әҙиптәренән 15 кеше делегат булып барҙы. Бына ул исемлек: Әнғәм Атнабаев, Рауил Бикбаев, Динис Бүләков, Әмир Гәрәев, Ғәли Ибраһимов, Фәрит Иҫәнғолов, Мостай Кәрим, Әсғәт Мирзаһитов, Муса Ғәли, Назар Нәжми, Булат Рафиҡов, Рафаэль Сафин, Әхиәр Хәкимов, Михаил Чванов, Гөлфиә Юнысова.

Күреүегеҙсә, делегат сифатында съезда Ғәли ағай ҙа ҡатнашты. «Рәсәй» ҡунаҡханаһында беҙ уның менән йәнәш бүлмәләрҙә йәшәнек (мин съезда ҡунаҡтар исемлегендә инем, һәм, идараның яуаплы секретары булараҡ, бик күп йүгерергә тура килде был «ҡунаҡҡа»). Шунда миңә төрлө йомош-эштәрҙә, ойоштороу мәсьәләләрендә Ғәли ағай, оло башын кесе итеп, ныҡ ярҙам иткәйне.

Шулай бер мәл, 1981 йылдың матур йәйге көндәрендә (июль уртаһы ине) Салауат батырыбыҙҙың тыуған яғында башҡорт әҙәбиәте көндәре уҙғарылды. Унда әҙиптәрҙән Ғәли ағай Ибраһимов, Ғәзим Шафиҡов, Әсхәл Әхмәт-Хужа, тарихсы Виктор Сидоров һәм был юлдарҙың авторы, йәш шағирҙар, журналистар ҡатнашты. Район мәктәптәренең әҙәбиәт уҡытыусылары саҡырылған. Әҙәби кисәләр, халыҡ менән осрашыуҙар байрам төҫө алды. Беҙ булған тирә-яҡ

ауылдарҙа китап сауҙаһы ысын мәғәнәһендә яҙыусы менән уҡыусының ихлас осрашыу йолаһына әйләнде. Ул замандарҙа китап һүҙенә ышаныс көслө ине. Яҙыусы һүҙенә, шиғри фекер, образға ышаныс, ылығыу, фәһем туплау тигән төшөнсәләр ныҡ ине әле...

Малаяҙҙа беҙ, осрашыуҙарҙан бушаған аҙ ғына ял ваҡытыбыҙҙа, китап кибетенә инеп сыҡтыҡ. Шунда ла Ғәли ағай үҙенең «китап ене ҡағылған кеше» икәнлеген күрһәтте: үҙе Өфөлә инде һатып алған, танышырға ла өлгөргән бер нисә китапты бында осратып, миңә тәҡдим итте:

— Ҡәҙим, һин бына был китаптарҙы мотлаҡ ал, улар һиңә эҙләнеүҙәреңдә ярҙам итәсәк, — тип өгөт һүҙен белдерҙе.

Шунда оло ҡәләмдәшем Ғәли ағайҙың ихлас кәңәшен тотоп, Малаяҙҙан алып ҡайтҡан китаптар миндә бөгөн дә һаҡлана, улай ғына ла түгел, һаман да хеҙмәт итәләр улар миңә, Ғәли ағайҙан ҡалған изге аманат улар бөгөн дә: «Я открою тебе сокровенное слово» (Литература Вавилонии и Ассирии). Гильгамеш тураһындағы эпостың һәм башҡа батырҙар тураһындағы поэмаларҙың аккад теленән тәржемәләре; С.Ш.Чагдуров. «Происхождение Гэсэриады». Бурят халҡының «Гэсэр-хан» эпосын төрки халыҡтарҙың эпик әҫәрҙәре менән сағыштырмаса өйрәнеү; «Маадай-Ҡара». Алтай халҡының героик эпосы. Таулы-Алтай китап нәшриәте, 1979.

Ғәли ағайҙың киң мәғлүмәтлелеге, күп белеүе унығ даими уҡыуынан, яңы әҙәбиәт менән системалы ҡыҙыҡһынып барыуынан да килгәндер. Үҙенә бик ныҡ оҡшаған китапты бүләк итергә ашығыр ине. Яҙған автографтары ла ошоно раҫлап торалар. Бына, мәҫәлән, юғарыла телгә алынған «Происхождение Гэсэриады» китабын миңә бүләк иткәндә ошондай һүҙҙәр яҙған:

«Ҡәҙим дуҫ! Беҙҙә лә ошондай ҡыйыу һәм хаҡлы хеҙмәттәр булыр, тип ышанам. Ғ.Ибраһимов. 10.03.1981 йыл».

— Китап бүләк итеүҙе боронғолар оло мәртәбәгә һанаған. Ул бит уҡымышлылыҡты күрһәткән! — тип килеп инде Ғәли ағай бер мәл минең эш бүлмәһенә. — Бына һиңә тағы бер китап алып килдем әле!.. — Үҙе, ирендәрен йыш-йыш ҡымтып, серле генә йылмая, былай ҙа ҡыҫынҡы күҙҙәрен ҡыҫып, ҡаршыға килеп баҫа. Ҡәйефе шәп, әммә әңгәмәсеһенең реакцияһын (яуабын), йәғни үҙ фекерен әйткәнен көтөп, шым ғына баҫып тора. Уйлап ҡараһаң, был да тәрбиәлелек, оло әҙәплелек билдәһе бит әле. Ғәли ағай бүләк иткән китаптар араһында миңә «Ҡинйә» романының беренсе (1977 йыл) һәм икенсе (1987 йыл) китаптары — айырыуса ҡәҙерле иҫтәлектәр. Икенсе китап («Ил ағаһы») донъя күреү менән, артынса уҡ, 1988 йылда, яҙыусы Рим Ахмедов тәржемәһендә урыҫ телендә килеп тә сыҡты. «Башҡорт романы» китапханаһы «Ағиҙел» серияһында донъя күргән был китабынан күңел ҡанатланыуҙарын, оло ҡыуаныстарын миңә Ғәли ағай ғәҙәтенсә бик фәһемле һүҙҙәр аша еткергән:

«Хөрмәтле Ҡәҙим дуҫҡа, изге олатайҙарҙың яҡты рухы беҙгә илһам бирһен. Ғ.Ибраһимов. 19 июль, 1989 йыл».

Ғәли ағай үҙенә фекерҙәш булған йәш ҡәләмдәштәрендә китапҡа һөйөү аша ғилемгә ынтылыу, ылығыу, фәнни эҙләнеү, эҙәрмәнлек ҡомары тәрбиәләргә, тарихи әҫәрҙәр яҙырға теләк уятырға тырышты. Башҡорт фольклористикаһының, лингвистика һәм этнология фәндәренең тиҙерәк үҫеп етеүен теләне. Бары тик тейешле ғилми хеҙмәткәрҙәр әҙерләгәндә генә артабанғы эҙләнеүҙәрҙең емешле буласағына ул ныҡ ышанды. Был хаҡта уның төрлө ғилми кәңәшмәләрҙә, конференцияларҙа һәм йыйылыштарҙағы сығыштары асыҡ һөйләй, беҙгә биргән теләк-кәңәштәре лә раҫлай.

Ғәли ағайҙың 1981 йылдың 27 мартында Башҡортостан яҙыусыларының асыҡ партия йыйылышындағы фәһемле сығышы хәтергә уйылып ҡалған (һәм минең шул саҡтағы ҡуйын дәфтәренә лә теркәлгән). Халҡыбыҙҙың боронғо дәүерҙәрҙән килгән асыл тарихын әҙәбиәттә һәм фәндә дөрөҫ яҡтыртыу хаҡында һөйләгәндә ул «тамырҙар һәм емештәр» тураһында шәп әйтте: «Беҙ, ғәҙәттә, емештәрен ашайбыҙ, ә тамырҙары тураһында йыш ҡына онотабыҙ». Тәрән мәғәнәле, кинәйәле һүҙҙәр! Ысынлап та, күп осраҡта беҙ әйберҙең күренеп торғанын ғына байҡайбыҙ, өҫтә ятҡанын ғына баһалайбыҙ, ә быуаттар төпкөлөндәге тәрән тарихыбыҙҙы уйлап та бирмәйбеҙ, ябай күҙгә күренмәгән тамырҙарыбыҙ — халҡыбыҙҙың төпкөлдәге, алыҫ тарихы икенсе планда ҡала, онотола, үкенескә ҡаршы.

— Алтын Урҙа тарихы урыҫ йылъяҙмаларында, яҙма ҡомартҡыларҙа төрлө кимәлдә булһа ла сағылыш тапҡан әле ул. Ә бына башҡорттоң унан да боронғо тарихы, әйтәйек, Орхон-Йәнәсәй яҙмаларындағы төркиҙәр тарихына бәйләнешебеҙ, һундар менән беҙҙең уртаҡлыҡ — былар әле асылмаған сер булып ята. Шуларға тотонорға кәрәк, мырҙа! Ул йәһәттән, ана, күршеләребеҙ бик актив эшләй... — тигәне хәтерҙә һаман да Ғәли ағайҙың.

Ул, ысынлап та, оло ҡаһарманлыҡҡа торошло ижадында үҙенең тормош принциптарына тоғро булды. Бының асыҡ дәлилдәре — үҙе иҫән саҡта донъя күргән «Ҡинйә» романының беренсе («Тапалған йәйләү») һәм икенсе («Ил ағаһы») китаптары — уның үлемһеҙ ижадына лайыҡлы һәйкәлдәр бәрәбәрендә.

* * *

Күп булды беҙҙең бергә йөрөгән онотолмаҫ саҡтар. Ғәли ағайҙы теге йәки был осрашыуға, юл-сәфәргә бик йыш алып сығып булмаһа ла, тарихи темаға бәйле осраҡта, юҡ ваҡытын табып, барырға риза булыр ине.

Шулай, 1984 йылдың йәйендә беҙ Эстония ССР-ынан ҡәҙерле ҡунаҡтар ҡабул иттек — Салауат батырыбыҙҙың һуңғы төйәге Рогервик крепосынан, хәҙерге Палдиски ҡалаһынан, рәсми делегация килде. Делегация составында ҡала Советы рәйесе Татьяна Рыбакова (етәксе), хәрби карап командиры урынбаҫары Сергей Райлян, врач Татьяна Ярунина һәм хәрби хеҙмәткәр Вячеслав Волков бар. Ул осорҙа эстон дуҫтар үҙҙәрендә Салауат Юлаев музейын төҙөү эшен башлап ҡына торалар ине. Материалдар туплау, беҙҙең республика менән яҡындан бәйләнеш урынлаштырыу ине уларҙың сәфәренең маҡсаты. Әй-Йүрүҙән буйҙарында, Салауаттың ғәзиз төйәгендә Палдиски ҡунаҡтары менән осрашыуҙарҙа башҡорт әҙиптәренән Ғәли Ибраһимов, Булат Рафиҡов, Мирас Иҙелбаев, Гөлфиә Юнысова һәм ошо юлдарҙың авторы ҡатнашты. Салауат тарихына, үҙенең иң яратҡан темаһына төшөп киткәс инде, Ғәли ағай бында ла тыңлаусыларҙы үҙенең мауыҡтырғыс әңгәмәләре менән арбаны.

Ундағы осрашыуҙарҙың йылылығы, Балтик буйынан килгән дуҫтар менән аралашыу тәьҫораттары йырлы үҙән — Йүрүҙәндең онотолмаҫ моңло кистәре булып, Янғантауҙың һары һандуғаслы һил таңдары булып хәтерҙәргә уйылып ҡалған:

«Ах, был таңдар!..
Янғантау таңдары,
Ҡайынлыҡтың сихри ҡуйынында
Аҡ һындары менән йөрәгемә
Ғүмерлек моң булып уйылған».

Шул йылдың көҙөндә булһа кәрәк, Палдискиҙан килгән делегацияға яуап рәүешендә беҙҙең республиканан да бик лайыҡлы төркөм Балтик буйына алыҫ сәфәргә барып ҡайтты. Салауат батырҙың һуңғы төйәгенә барыу бәхете яҙыусыларҙан был юлы Ғәли ағайға ғына эләкте.

Билдәле булыуынса, Палдиски ҡалаһында (Эстония) Салауат Юлаев музейы 1986 йылдың 14 майында асылды, ә милли батырыбыҙға бюст-һәйкәлдең тәүгеһе 1989 йылдың 16 июнендә ҡуйылды.

Һөйләгәндәрҙән сығып, ҡайһы бер һығымталар яһарға ла булалыр инде.

1. Ғәли ағай йәш ҡәләмдәштәренә бик ихлас кәңәшсе булды. Әҙәби ижадта булһынмы, тормоштамы, үҙе белгәнен йәштәргә өйрәтеүҙе ул ғәҙәти эш, норма күрҙе. «Ағиҙел» журналында эшләгән осорҙан алып, ғүмеренең ахырынаса был «йөктө» ул үҙенең ижад бурысы тип һананы, һәм ярҙамсыл дуҫ, ихлас кеше, оло ҡәләмдәш булып ҡалды.

2. Башҡорт әҙәбиәтендә тарихи темаға ҡыйыуыраҡ тотонорға, йәштәрҙә ошо эшкә ынтылыш тәрбиәләү, үҙ көсөңә ышаныс, өмөт уятыу йәһәтенән дә ул оло миссия башҡарҙы.

3. Тарихи темала эшләүҙең фиҙакәрлек өлгөһөн ул үҙе күрһәтте. Ун йыл арауығында ул «Ҡинйә» романының ике китабын яҙып баҫтырҙы (550—600-әр битле!), урыҫ теленә тәржемә эшләтеп, киң ҡатлам уҡыусылар иғтибарына еткереүгә өлгәште. Романдың һуңғы — өсөнсө китабының төп сюжет һыҙмаһын ҡараламала яҙып, әҙерләп ҡалдырҙы.

4. «Ғәли Ибраһимовтың ысын мәғәнәһендә тарихи роман тип аталырлыҡ «Ҡинйә» романынан һуң асылда башҡорт әҙәбиәтендә был жанрҙың дәррәү үҫеше башланды. Ошонан һуң инде башҡорттарҙың боронғораҡ тарихын тасуирлаған яңы әҫәрҙәр ҙә барлыҡҡа килде...» тигән тезисы менән яҙыусы Аҫылғужа Баһуманов хаҡлы, әлбиттә, («С.Юлаев исемендәге премия лауреаттары», Өфө, «Китап», 1999, 120—121 биттәр). Тарихи тамырҙарға тоғролоҡ, тарихты художестволы тойомлау юлында Ғәли ағай Ибраһимовтың «ҡул арты» еңел булып сыҡты: «Ҡинйә» — башҡорт тарихи романдары ғаиләһенең «кинйә улы» булмаған икән, — уның артынса ана күпме яңы әҫәрҙәр бер-бер артлы әҙәбиәтебеҙ күген балҡытты!

Әхиәр Хәкимов, «Һауыр ҡумта» (1982), «Думбыра сыңы» (1986);
Ҡирәй Мәргән, «Бөркөт ҡанаты» (1981—1985);
Булат Рафиҡов, «Ҡараһаҡал» (1989);
Яныбай Хамматов, «Ҡара яу» (1992);
Ғайса Хөсәйенов, «Ҡанлы илле биш» (1996);
Роберт Байымов, «Сыбар шоңҡар» (1997);
Ғәзим Шафиҡов, «Атыу» («Расстрел», 1999);
Ноғман Мусин, «Шунда ята батыр һөйәге» (2001).

Ғүмерҙең ҡыҫҡалығын аңлай ине Ғәли ағай, һәм шуға ла беҙҙе, үҙенең йәш ҡәләмдәш дуҫтарын, ваҡыттың ҡәҙерен белеп йәшәргә, һәр уңай мөмкинлекте, һәр форсатты әҙәби ижадҡа сарыфларға өндәне. Ипле генә итеп, кинәйә менән әйтер, өйрәтеүгә ҡарағанда күберәк кәңәш бирер ине.

Оло ҡәләмдәш, ябай кеше, ихлас әңгәмәсе, ҙур яҙыусы Ғәли Ғизетдин улы Ибраһимов арабыҙҙа сабыр холоҡло, үтә итәғәтле, бик тә баҫалҡы, ҡаты сирләүе тураһында тауыш-тын сығармай ғына йөрөнө лә ҡапыл ғына китеп тә барҙы. Хатта кешеләр ышанмай ҙа ҡалды уның арабыҙҙан китеүенә.

Ундайҙар китмәй, гел арабыҙҙа кеүек.

Эх, шулай булһын ине лә бит! Үкенес, үкенес...

2003 й.



## Зөлфәр Хисмәтуллин
## (1923—1983)

### Фәһемле осрашыуҙар

Ҡем ул Зөлфәр Хисмәтуллин? Бөгөнгө яңы быуын, йәш уҡыусылар (йәғни әҙәбиәт һөйөүселәр) уны белеп бөтмәүҙәре лә бик ихтимал. Сөнки был әҙиптең беҙҙең аранан китеүенә лә ике тиҫтәнән ашыу ғүмер үтеп киткән. Икенсенән, ошо дәүер эсендә яҙыусының һуңғы китабы бынан ун өс йыл элек сыҡҡан («Характерлы кеше», Өфө, 1990). Уның хаҡында ваҡытлы матбуғатта ла йә әҙәби-ижади мираҫын байҡаған берәй мәҡәлә, йәки иҫтәлек кеүек берәй яҙма донъя күрмәне. Шулай булғас, бөгөн йәш быуын ҡайҙан Зөлфәр Хисмәтуллин хаҡында хәбәрҙар булһын да, берәй нәмә белһен, ти?

Ә бит Зөлфәр Фазыл улы Хисмәтуллин, үҙе яҙғанса, «характерлы кеше» генә түгел, иң мөһиме, кешелекле, көслө рухлы шәхес тә ине. Ҡешелекле тигәндә мин иң элек уның бүтәндәргә итәғәтле, кеселекле һәм бик тә иғтибарлы, ихтирамлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыр инем. Тәбиғәтендәге ошо сифаттары уға ҡушылған, йөкмәтелгән һәр бер эште еренә еткереп башҡарырға ла, кешеләргә бары тик изгелек итергә, файҙа килтерергә лә булышлыҡ иткәндер.

Гәзит һәм журнал редакцияларында эшләгәндә лә, Башҡортостан Яҙыусылар союзының Әҙәби фонды директоры сағында ла ул үҙенең ошо төп принциптарына — кешеләргә изгелек ҡылырға — тоғро булды. Ҡешенең хәленә инеү, йәшәү шарттарын яҡшыртыу, ижад итергә уңайлыҡтар булдырыу — бер уйлаһаң, иң мөһим хәстәрҙәр икән дә баһа! Кеше шуларһыҙ йәшәй ҙә, тулы ҡеүәтенә хеҙмәт итә лә алмай. Ә ана шул хәстәрҙәр менән кемдер берәү шөғөлләнергә, ваҡытын бүлеп, хатта үҙ ижадын онотоп, теге йәки был йомош артынан сабырға ла тейеш бит әле! Зөлфәр ағай Хисмәтуллин иһә ошо мөһим бурыстарҙы тыныс ҡына, ихластан атҡарҙы ла йөрөнө, үҙенә бер кемдән дә ярҙам да һораманы, зарланманы ла.

Ә ул зарлана торғандар затынан түгел ине. Ғорур булды, аҙ һөйләр, күп эшләр ине. 1977—1981 йылдарҙа беҙгә Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһында бергә эшләргә тура килде. Бына шунда мин уның эш кешеһе характерлы булыуын, һүҙенең эштән айырылмауын аңланым. Идара рәйесе Әсғәт Мирзаһитов иртәнге сәғәттәрҙә берәй йомош ҡушһа, Зөлфәр ағай уны йә шул көнөндә үк, йә иртәгәһенә үк үтәп тә ҡуйған була.

Хәҙер беҙ «торғонлоҡ» тип атаған замандарҙа яҙыусы халҡының йәшәү шарттарын яҡшыртыу эше бөгөнгөнән күпкә һәйбәт ине: дәүләт иҫәбенә төҙөлгән йорттарҙан яҙыусы ғаиләһенә фатир алып биреү менән даими рәүештә Литфонд шөғөлләнде. Бында «Литфонд»ты З.Ф.Хисмәтуллин тип уҡырға кәрәк. Бер ниндәй шаяртыуһыҙ. Сөнки Зөлфәр ағай шул мәсьәләгә тотонмаһа, төбөнә төшмәһә, проблема хәл ителмәй ҡала, тимәк, фатир ҙа юҡ тигән һүҙ.

Һәм, әйтергә кәрәк, Литфондта ул эшләгән дәүерҙә (1967—1983) әллә күпме яҙыусы фатирлы һәм эш кабинетлы (ижад бүлмәле) булып ҡалды, әҙиптәрҙең «Аҡлан»дан башҡа «Аҡманай» баҡса ауылы үҫеп сыҡты, мәрхүм яҙыусыларыбыҙға хөкүмәт иҫәбенә күпме мемориаль һәйкәлдәр (ҡәбер таштары) ҡуйылды...

Изгелек ерҙә ятып ҡалмай, тиҙәр. Күңелдәргә күсә икән ул. Зөлфәр ағай тураһында кем менән генә әңгәмәләшмә, барыһы ла эшкә уның шикелле лә яуаплы ҡараған кеше һирәк, тиҙәр. Хаҡ һүҙҙәр.

Зөлфәр Хисмәтуллин әҙәбиәттә ҡыҫҡа, бәләкәй күләмле сатирик һәм юмористик хикәйәләр авторы булараҡ танылды. Ҡыҫҡа яҙыу, ҡыҫҡалыҡ — талант билдәһе, тиҙәр. Сөнки төп фекерҙе бәләкәй генә күләм эсендә лә сатнатып әйтеп биреү өсөн, ысынлап та, оҫталыҡ, яҙыу камиллығы, тел тапҡырлығы, фекер тослоғо кәрәк бит. Яҙыусының алтмыш йәше уңайынан донъя күргән «Мөхәббәт серҙәре» (1983) китабына яҙған баш һүҙендә күренекле прозаик, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фәрит Иҫәнғолов, мәҫәлән, З.Хисмәтуллиндың һирәгерәк, сағыштырмаса аҙыраҡ ижад итеүенең сәбәптәрен шулай билдәләй: «Ул әҙәбиәткә тормош һәм ижад тәжрибәһен ныҡ туплап, бер юлы өлгөргән яҙыусы булып килде. Бының өҫтөнә, күргәнебеҙсә, ул әҫәрҙәрен мәшәҡәтле һәм яуаплы эштәр араһында, һирәк тейгән ял сәғәттәрендә генә яҙа алды (бәлки, былар өҫтөнә яу яралары һыҙлауы ла ҡушылғандыр)».

Зөлфәр Хисмәтуллиндың ҡыҫҡа хикәйәләр яҙыу менән генә сикләнеүе һәм ҙур күләмле әҫәрҙәргә тотонмауы уның әҙәби ижад өсөн махсус, буш ваҡыт таба алмауына бәйлелер, бәлки. Уның берҙән-бер повесы ла («Таң алдынан»), мәҫәлән, күләм яғынан ҙур түгел — ҡырҡ битлек. Ләкин бында эш күләмдә түгел.

Зөлфәр Хисмәтуллиндың прозаһы фекер тығыҙлығы менән көслө. Ҡыҫҡа хикәйәләрҙә, бигерәк тә психологизм менән һуғарылған етди хикәйәләрендә («Әбейҙәр сыуағы», «Өҙөлгән япраҡ», «Йоҡоһоҙ төн», «Һуңғы осрашыу» һәм башҡалар), ул үҙен оҫта ҡәләмле рәссам итеп таныта. Ә инде сатирик һәм юмористик пландағы хикәйәләре менән ул әҙәбиәтебеҙҙә һүҙ оҫталары булып танылған Сәғит Агиш, Сәләх Кулибай, Тимер Арслан, Марат Кәримов рәтенә күтәрелде.

Тамсыларҙан күл йыйыла тигәндәй, З.Хисмәтуллиндың яйлап-яйлап, ҡабаланмай ғына тиргән ижад емештәренән тупланған китаптары ла тиҫтәләп булып киткән икән дә. Уларҙың барыһы ла тормоштағы хәл-ваҡиғаларға нигеҙләнеп яҙылған, теге йәки был фәһемле осрашыуҙар һөҙөмтәһе булып тыуған. Яҙыусының ҡайһы ғына хикәйәһенә мөрәжәғәт итһәң дә, уларҙан тормош һулышы бөркөлә, халыҡсан тел, образлы ҡылыҡһырлау күңелгә ята. «Әбейҙәр сыуағы» хикәйәһендә, мәҫәлән, тәбиғәттең кеше менән йәнәшә ҡуйылыуы (һуңғы күкрәү, йәшенле ҡойма ямғыр, әбейҙәр сыуағы — мөхәббәт коллизияһы, ғаилә тарҡалыуы, етем бала...) лирик геройҙарҙың күңел донъяһын тәрәнерәк асыу өсөн бик уңышлы файҙаланыла.

Һүҙҙе йомғаҡлап әйткәндә, яҙыусы Зөлфәр Хисмәтуллиндың башҡорт әҙәбиәтендәге урыны бәхәсһеҙ. Ул сатира-юмор өлкәһендә күп эшләне, уңыштар ҡаҙанды, оҫталыҡҡа өлгәште. Шуның менән бергә, реалистик («етди») пландағы хикәйәләрендә ул үтә лә тормошсан проблемалар күтәреүсе әҙип булараҡ күҙаллана: ниндәй генә дәүерҙәр үтмәһен, мөхәббәт, сафлыҡ, әҙәп, әхлаҡ, иман ҡанундары иҫкермәй, улар йәмғиәттең аҫыл нигеҙен тәшкил итә. Зөлфәр Хисмәтуллиндың геройҙары бөгөн дә беҙҙең арала йөрөй кеүек. Тирә-яғыңа күҙ һалырға, бүтәндәрҙең ҡылыҡ-холҡон баһалағанда үҙ-үҙеңде лә байҡарға, күңел тетрәткес хәлдәрҙән, аянысլы яҙмыштарҙан фәһем-ғибрәт алырға ла саҡыра улар.

2003 й.